✓ *Рух камиллығын үтескә алып та, һатып алып та булмай. Һатылһа ла, һатып алыусыһы булмаç ине. Унын ҡарауы, түбәнлек көн дә һатып алына.*
*(Сенека).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№21 (543)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Енәйәтсе булып тыумайҙар...**
Ә улар ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң?

4-5

**Бер йылға бер әсһән дә...**
һин барыбер әскесе

8-9

**Аҫаба халыҡты ихтирам ит...**
телен дә аңлай бел!

9

**"Мин һеҙҙе яратам,**
һеҙҙең йөрәгегеҙ асыҡ..."

12-13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Пионер ойошмалары барыбер ҙә мәктәп балаларын һәм үсмерҙәрҙе туплаусы, тәрбиәләүсе, яҡты маҡсатҡа әйҙәүсе булды. Ә бөгөн беҙҙең балалар ошондай тәрбиә ысулынан мәхрүм һәм бының эҙемтәләре шәптән түгел...




***Мөкәрәмә САДИҠОВА, яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, балалар матбуғаты ветераны:*** Заманында ысын мәғәнәһендә илһөйәрҙәр, намыçлы, яҡшы кешеләр тәрбиәләүҙә илебеҙҙең Бөтә Союз пионер ойошмаһы баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды. Әлеге ваҡытта ундай ойошманың юҡлығы, әлбиттә, үҙенең кире эҙемтәһен белдерә. Балалар һәм үсмерҙәр яҙмышы урамда тороп ҡалды, тиһәң дә була. Иçкегә иçәпләһәләр ҙә, был һыналған системаны емерҙеләр емереүен дә, ләкин уны алыштыра алырлыҡ йүнле генә ысул уйлап таба алмайылар әле. Республикала Башҡортостан пионерҙары балалар йәмәғәт ойошмаһы бар барлығын, тик ул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, элекке кеүек бөтә уҡыусы балаларҙы ла үҙ сафтарына йәлеп итә алмай, унын барлығы ла һиҙелмәй хатта. Ни менән һәм кемдәр менән шөғөлләнәләр был ойошма - балаларҙың күбеһе был хаҡта белмәй ҙә, моғайын. Ә бит элекке пионер хәрәкәте 4-се класстан алып комсомол йәшенә тиклемге бөтә балаларҙы ла үҙ сафына ҡабул итә ине. Унын сафтарында тәрбиә һәм сынығыу алып, күпме яҡшы кешеләр, билдәле шәхестәр үçеп сыҡты! Дөрөç, әлеге ваҡытта пионерия хаҡында һүҙ сыҡһа, ҡайһы берәүҙәр ирония менән Павлик Морозовты хәтергә төшөрә. Был, әлбиттә, бәхәсле осраҡ, ә бына шул уҡ ваҡытта Бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ ҡыйыулыҡтары менән исемдәре мәңгелектә ҡалған герой-пионерҙар хаҡында берәү ҙә иçкә алмай. Илһөйәрлек традициялары менән берлектә кешелеклелек, кеселеклелек, өлкәндәргә - ихтирам, үҙенән кескәйҙәргә иғтибарлылыҡ сифаттары, граждандлыҡ әүҙемлеге тәрбиәләнә ине пионерҙарҙа. Ялҡауҙарҙы, тәртипһеҙҙәрҙе, "икеле"гә уҡығандарҙы оялтып, тәнҡитләп, ниндәй тәьçирле йыйындар үткәрә торғайны улар! Иçке ҡағыҙ, металл һыныҡтары йыйыу тиһеңме, тимурсылар командалары төҙөп, өлкәндәргә ярҙам ойоштороумы - бөтә ергә лә өлгөрә инеләр. Бөгөн балалар йә урамда ҡайҙа барып һуғылырға белмәй йөрөй, йә көнө-төнө ҡуҙғалмай компьютерға текәлеп ултыра. Мәктәп тәрбиә эшен онотто, ата-әсәләр көнө буйы эштә. Исмаһам, китап, гәзит-журнал уҡыһын ине балалар, был үҙе бер тәрбиә сараһы бит. Юҡ, әле әйткәнемсә, бөтөн "тәрбиә" эшен компьютер менән урам йоғонтоһо алыштырҙы...


**(Дауамы 2-се биттә).**


### АФАРИН!





“Минең Рәми” марафоны тураһында 11-се биттә уҡығыҙ.

✓ *Үкенескә күрә, ҡайһы берәүҙәр, гәзиткә яҙылмайынса, ана шундай файҙалы мәғлүмәттәрҙән күрәләтә үҙҙәрен мәхрүм итә. Бар шундайҙар, хатта район гәзитен дә алдырмайҙар бит.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# АҘНАҺЫНА БЕР БУЛҺА ЛА...

## гәзит уҡыйыҡ, йәмәғәт!

**"Киске Өфө" гәзите сыға башлаған мәлдәрҙә беҙ Асҡарҙа йәшәй инек әле. Шул йылда ауылға күсеп килдек. Бер шулай күршеләге еңгәмдәргә ингәндә күреп ҡалып, күҙ һала ҡуйҙым бит үҙемә әле таныш булмаған "Киске Өфө" тигән гәзиткә. "Ҡара-ҡара, хәтәр шәп гәзит күренә түгелме, ҡайҙа, алып ҡайтып уҡыйым әле", тип һорап алдым да бер тынала уҡып сыҡтым һәм шунда уҡ почтаға барып, икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылып та ҡайттым.**

Шунан бирле айырылғаным юҡ "Киске Өфө"нән. Ҡайһы саҡ бер генә һаны килмәй ҡалһа ла, почтальондарҙы аптыратып, йонсотоп бөтәм һорап. Былтыр шулай 50-се һаны килмәне лә ҡуйҙы бит. "Кем алыҡ?"та отҡаным өсөн М.Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре" һүҙләгән дә вәғәҙә иткәйне редакция. Үҙебеҙҙең почтальондан һорай барып, табылмағас, туҡтауһыҙ районға шылтыратам, гәзит таптырам тегеләрҙән. Уларҙан да файҙа булмағас, редакцияға яҙ ҙа ебәр хат. Шунан 20 дана гәзит менән әлеге бүләк китап килеп төшмәһенме бер заман! Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо көн ҡунаҡ саҡырғайным, уларҙың һәммәһенә лә таратып бирҙем баяғы гәзитте. "Уҡып сығығыҙ ҙа барып яҙылығыҙ", тием быларға. Был һүҙҙәрем бигерәк тә уҡытыусыларға ҡағыла ине, сөнки "Киске Өфө"нө уҡымаған, уға яҙылмаған уҡытыусы - уҡытыусы түгел ул, тигән фекерҙәмен. Почта ғәйебеме, әллә үҙе яҙылмаған берәйһе уҡырға тип аламы - килмәй ҙә ҡуя шул ҡайһы саҡ гәзит. Анау көндө лә бер һаны килеп етмәне. Беҙҙең почтала эшләүсе Мәйсәрә күрше ауыл почтаһына:"Юҡмы берегеҙҙә шул гәзит, бирегеҙ инде, Мәрхәбә апай хәҙер йәнемде ала", тип шылтырата икән. Шулай итеп, Йәлимбәт ауылы почтальоны килтереп биреп китте үҙенең "Киске Өфө"һөн. Бына шулай ҙа була. Гәзитте ихтирам иткәнгә күрә, ундағы мәғлүмәттәрҙе башҡа бер ерҙән дә табып булмағанға, шулай ҡәҙерле ул миңә. Әйткәндәй, элегерәк "Тыйыуҙар" тигән матур бер рубрика бирелеп килә ине. Шул саҡ мин ундағы материалдарҙы ҡырҡып алып, бәләкәй генә китапсыҡ итеп, Өфөлә уҡып йөрөгән ҡыҙҙарым ҡайтыуға әҙерләп ҡуя инем. Башҡорттарҙа борондан килгән тәрбиә ҡануңдары, айырыуса ҡыҙ балалар тәрбиәләү ысулдары тураһында бик файҙалы булды ул рубрика материалдары. Әле лә һәр һанын йыйып, ҡәҙерләп кенә тотам. Һәр бер һанын ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Уҡытыусы булараҡ, ундағы һәр мәҡәләнең тәрбиәүи әһәмиәтен бик юғары баһалайым. Бөгөнгө шарттарҙа кешегә нисек юғалып ҡалмаҫҡа, үҙ эшендә, шөғөлөндө булдырыу өсөн ниҙәр эшләргә кәрәклекте өйрәтеп, белгестәр, иҡтисадсылар, эшҡыуарҙар, юристар кәңәштәре биреү, улар менән "Диалог"тар үткәреү ҙә күп мәсьәләләргә күҙҙе аса, тип уйлайым.

Үкенескә күрә, ҡайһы берәүҙәр, гәзиткә яҙылмайынса, ана шундай файҙалы мәғлүмәттәрҙән күрәләтә үҙҙәрен мәхрүм итә. Бар шундайҙар, хатта район гәзитен дә алдырмайҙар бит. Беҙ тормош юлдашым менән үткән быуаттың ауыр 95-се йылдарында ла хатта гәзитһеҙ йәшәмәнек. Аҡса юҡ ваҡыттар ине. Әмәлен таба инек барыбер. Тиҙ генә һөт-ҡорот, эремсек һата һалып, ҡулға төшкән аҡсаға гәзиткә яҙылып ҡайта торғайным. Әле, Аллаға шөкөр, аҡсаға әллә ни аптырамай халыҡ, тырышҡан кеше үҙ йүнен, үҙ көнөн күрә. Тик тормош мәшәҡәттәре менән булышып, үҙеңдән арыны күрмәй-белмәй йәшәүҙең бер мәғәнәһе лә юҡтыр ул. Исмаһам, аҙнаһына бер булһа ла иркенләп ултырып гәзит уҡыйыҡсы, йәмәғәт. Юғиһә, тормош шулай ығы-зығы менән үтә лә китә бит ул...

**Мәрхәбә НОҒОМАНОВА.**
**Әбйәлил районы Салауат ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Пионер ойошмалары барыбер ҙә мәктәп балаларын һәм үҫмерҙәрҙе туплаусы, тәрбиәләүсе, яҡты маҡсатҡа әйҙәүсе булды. Ә бөгөн беҙҙең балалар ошондай тәрбиә ысулынан мәхрүм һәм бының әҙемтәләре шәптән түгел...*

**(Башы 1-се биттә).**

***Алексей ПРОКОФЬЕВ, "Башҡортостан пионеры" республика балалар йәмәғәт ойошмаһының Өфө ҡала бүлеге рәйесе:*** Беҙҙең ойошмала былтыр 280 мең бала ағза булып торһа, быйыл улар һаны 180 меңгә тороп ҡалды, ә Өфө ҡалаһы буйынса ни бары 10 мең пионер иҫәпләнә. Эш ниҙә, тип һорарһығыҙ. Сәбәп шул бер үк: мәктәптәрҙә барған оптималләштереү арҡаһында вожатыйҙар ҙа ҡыҫҡартылып бөттө, пионерҙар менән эшләүсе түгел, хатта психологтар һәм социаль педагогтар ҙа ҡалманы бит хәҙер унда. Әле килеп ишетелгән имеш-мимешкә ҡарағанда, тиҙҙән мәктәп директорҙарының тәрбиә эше буйынса урынбаҫарҙары ла бөтөрөләсәк икән. Ни өсөн бөтә мәктәптәрҙә лә пионер хәрәкәте элекке кеүек киң ҡолас алмаған, тигән һорауығыҙға шулай тип кенә әйтә алам: эш беҙҙән тормай. Был йәһәттән балалар менән тәрбиә эшенә дәүләт тарафынан махсус заказ булырға, был маҡсаттарға тейешле күләмдә аҡса бүленергә тейеш. Юғиһә, беҙҙең ойошма ике ултырғыс араһында төп башына ултырған осраҡты хәтерләтә. Бер яҡтан -Мәғариф министрлығы, икенсе яҡтан - Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы. Уларҙың һәр береһенең үҙ программаһы, үҙ көйө, тигәндәй... Үҙ-ара килешеп хеҙмәттәшлек итеү, маҡсаттарҙы берләштереп эш итеү етеңкерәмәйҙер, тигән фекерҙәмен. "Башҡортостан пионеры" грант иҫәбенә көн күрә. Шуныһы йәл: был проблемаларҙан иң тәүҙә балалар мәнфәғәтенә зыян килтерелә. Ә бөгөнгө балаларыбыҙ беҙҙең иҫ киткес: аҡыллылар, талантлылар, белемлеләр. Замана йәштәренең, үҫмерҙәрҙең тәртибенә зарланыусылар шуны аңлап етмәй: балалар ошо заман, бөгөнгө көнөбөҙ ситуацияһында торғоҙоп ҡалдырылды. Улар менән эшләргә, шөғөлләнергә кәрәк, бының өсөн аҡса йәлләргә ярайһы ни һуң?! Киләсәктә улар мәнфәғәтенә киткән сығымдар икеләтә ҡайтарыласаҡ бит - шуны онотмаҫҡа ине. Тейешле дәүләт программаһы булған хәлдә генә пионерҙар хәрәкәте һәр мәктәптә үҙ урынын табыр ине, тип уйлайым.

***Рөстәм ШАФИКОВ, Өфө ҡалаһы 130-сы дөйөм урта белем биреү мәктәбенең 7-се класс уҡыусыһы:*** Пионер булып ҡарамағас, уларҙың ниндәй булырға тейешлеген әйтә алмайым. Минеңсә, яҡшы кеше булыу өсөн мотлаҡ пионер булыу кәрәкмәйҙер. Ишетеп белеүемсә, пионерҙар бөтәһе бер кешегә оҡшаш; программа һалынған роботтар һымаҡ та күҙ алдыма килә улар. Белмәйенсә һөйләп, уларҙы үпкәләтеп тә ҡуйырмын, шуға күрә башҡа был турала әйтер һүҙем юҡ. Мин үҙем киләсәктә атайым кеүек булырға теләйем, ул эшҡыуар. Өс машинаһы бар, береһен, йәшем еткәс, миңә бүләк итә. Атайым араҡы эсмәй, тәмәке тартмай, мине лә, һеңлемде лә, әсәйемде лә бик ярата, аҡсаны күп алып ҡайта. Бөтәһе лә яҡшы кеүек былай, тик ул өйҙә саҡта миңә компьютерҙа ултырырға бирмәй: йә баҡсаға алып китә, йә тағы берәй эшен табып ҡына тора.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

● 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Майҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ Гүзәл Ситдиҡованың **"Күсле ил - көслө ил"**, 10 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның **"Көҙгө ысыҡ"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

Ә апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе Әбйәлил районы Билал ауылынан **Рафиҡ Әбйәлилов**, Асҡар ауылынан **Зөһрә Шөғөрова**, Хәмит ауылынан **Рәйлә Килдейәрова**, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан **Фаҡиһа Саҙрисламова**, Бөрйән районы Әтек ауылынан **Зәбир Ҡужабаев**, Иҫке Собханғол ауылынан **Сәләх Әхмәтов**, Учалы районы Илтабан ауылынан **Мәүлиҙә Закирова**, Баймаҡ ҡалаһынан **Миҙхәт Байрамғолов**, Әлшәй районы Яңы Сәпәш ауылынан **Гөлйөҙөм Йәғәфәрова**, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан **Нурғәле Сафуанов - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр" китабына**;

Ишембай ҡалаһынан **З. Ғөбәйҙуллина**, Әбйәлил районы Йәлимбәт ауылынан **Вәсилә Мәғәфүрова**, Асҡар ауылынан **Нәғимә Илһамова**, Мәсетле районы Йонос ауылынан **Сәғиҙә Мөхәрләмова**, Баймаҡ районы Сәйғәфәр ауылынан **Фирҙәүес Мырҙабулатова**, Үрге Таулыҡай ауылынан **Зифа Ғүмәрова**, Стәрлетамаҡ районы Отрадовка ауылынан **Рима Нуриева**, Өфө ҡалаһынан **Л. Ғәниева**, Ғафури районы Түбәнге Ташбүкән ауылынан **Рәйсә Таһирова**, Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылынан **Лилиә Әбделмәнова - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

● **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.




**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә III "Ҙур химия" халыҡ-ара форумы булып үтте. Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең нефть һәм газ химияһы тармағы белгестәренән тыш, форумда Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Ике көн дауамында сарала ҡатнашыусылар Волга буйы федераль округында Волга нефть химияһы комплексын үҫтереү, төбәктәрҙә нефть һәм газ химияһы тармағын үҫтереү буйынса оҙайлы сроклы стратегия әҙерләү, Волга нефть һәм газ химияһы комплексы предприятиелары өсөн Ямал-Волга буйы маршруты буйынса сеймал поставкалауҙы тергеҙеү мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓Сочи ҡалаһында Рәсәй Президенты Владимир Путиндың БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән эш осрашыуы үтте. Унда республиканың социаль-иҡтисади хәле тикшерелде, тип хәбәр итteләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Бынан тыш, Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президентына 2015 йылда Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышы тураһында һөйләне.

✓Башҡортостан Президенты 2013-2015 йылдарға "Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү" республика маҡсатлы программаһын раҫланы. Маҡсатлы программаны финанслау күләме бер миллиард 466 миллион һум тәшкил итә, шул иҫәптән федераль бюджеттан 266 миллион һум йәлеп ителә. Был аҡса 2015 йыл аҙағына 1850 етем баланы торлаҡ менән тәьмин итергә ярҙам итәсәк. 2007-2012 йылдарҙа 1646 етем баланың торлаҡ мәсьәләләре хәл ителде. Шул уҡ ваҡытта бюджет иҫәбенә торлаҡ менән тәьмин ителергә тейеш етем балалар һаны республикала йыл һайын уртаса 240 кешегә арта. 2013 йылдың 1 ғинуарына сираттан тыш торлаҡ менән тәьмин ителеү хоҡуғына эйә булған етем балалар һаны 1759 тәшкил итте.

✓Өфөлә, БР Мәғарифты үҫтереү институтында, "Башҡортостан өмөтө-2013" һәләтле балалар форумы үтте. Уның сиктәрендә Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһы, Мәскәү дәүләт университеты олимпиадаһы, өлкән синыф уҡыусылары өсөн финанс баҙары һәм эшҡыуарлыҡ буйынса олимпиада һәм башҡа интеллектуаль ярыштарҙың аҙаҡҡы этаптарында еңеүселәр һәм призерҙар тәбрикләнде.

*✓ Әммә ишеткәнеңде ни рәүешле итеп кемгә генә һөйләмә, хәҡиҡәтте таныған тәҡдиреӊ бар бит әле. Ул һинең ялғанлауыңа тамаша ҡылып рәхәтләнеп көлә генә бирә.*

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# БӘНДӘ ҺӨЙЛӘР...

## тәҡдир көлөр

**"Кем ялғансы? Ишеткәнен һөйләүсе" тигән әйтем дә бар халыҡ телендә. Был әйтем "Башҡорт халыҡ ижады"ның мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тупланған 10-сы томлығына ла ингән. Ислам динендә иһә ниндәйҙер һүҙҙең хаҡлығын раҫлар, кемделер нимәләлер ғәйепләр өсөн дүрт шаһиттың булыуы төп шарт булып тора. Тимәк, ишеткән һүҙеңдең дөрөҫлөгөн хатта бер-ике-өс шаһит та раҫлай алмай булып сыға түгелме? Өс кеше булһа, етмәгәнме? Етмәй икән шул. Уйлап ҡараһаң, был шартта хәҡиҡәтте сағылдырған һүҙ, мәғлүмәт өсөн ниндәй оло яуаплылыҡ ятҡанлығы күренә. Ишеткәнен генә һөйләүсе кеше барыбер ҙә ялғансы, икенсе төрлө әйткәндә, ғәйбәтсе тип йөрөтөлөргә тейеш булып сыға. "Әҙәм ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә" тигән әйтем дә ошо хәҡиҡәткә барып ялғана. "Бәндә һөйләр, тәҡдир көлөр" тигән әйтемдә лә шундай уҡ йөкмәткеләге хәҡиҡәт ята.**

Яҙыусы Әмир Әминевтың "Усман ташы" повесындағы ваҡиғаға оҡшаш хәлдәр беҙҙең тормошта ла йыш осрап тора. Шөкөр, Усман ауылындағы ошо Рамаҙан кеүек уҙамандар донъяла бар әле, тиергә ҡала бында. Хәйер, ауылдарыбыҙ, милләтебеҙ киләсәге лә шундайҙарҙың күберәк булыуына бәйле буласаҡ бит. Әҙәп, әхлаҡ, йола күҙлегенән ҡарағанда, повестағы ваҡиғалар сәйерерәк тә яңғыраш ала төҫлө, әммә мәсьәләгә "донъяға, кешелеккә, милләткә фәҡәт физик яҡтан һаусәләмәт, аҡыл йәһәтенән камил балалар тыуырға тейеш" тигән күҙлектән ҡараш ташлаһаң, барыһы ла үҙ урынына ултыра һымаҡ.

Бынан бер нисә йыл элек бер районда (быныһы сер булып ҡалһын) һикһәнен ҡыуалаған бер ҡарттың ҡырҡ йәшлек ҡатынға өйләнеүе һәм уларҙың малайҙары тыуыуы тураһында ишеткәйнем. Әлбиттә, был хәл уларҙың ауылдаштары тарафынан бер төрлө генә итеп баһаланмаған. Сабый тыуыуын ҡырынға һаплаусылар ҙа шул саҡ бигерәк күбәйеп киткән икән. Ҡапылғарай ғына ышанмаҫлыҡ булып тойолған был ваҡиғаға әллә күпме нарыҡлама-баһа бирелгән. Күпселек яңы тыуған сабыйҙың ҡарттыҡы булмауы, был мәсьәләгә шикләнеп ҡарауы хаҡында белдергән. Хатта сабыйҙы ауылдағы башҡа ирҙәргә сырамытып йөрөүселәр ҙә булған. Был хаҡта ҡарттың йөҙөнә бәреп әйтеүсе лә табылған.

-Ҡатының һиңә тиклем ҡулдан-ҡулға йөрөнө бит. Уның ҡапҡаһын төндәрен ел генә шығырлатҡан тиһеңме? Беҙгә ышанмаһаң, ана ДНК анализ үткәртеп ҡара, һинеке кеүек йәштә әле беҙҙең яҡта берәүҙең дә атай була алғаны юҡ, фәлән-фәсмәтән, - тигән был хаҡта әйтергә ҡыйыулығы еткән теге кеше.

Дөрөҫтөрмө-юҡмылыр, яңы ғына атай булыу шатлығын кисереп, ҡанатланып йөрөгән ҡарт, имеш, шулай тип яуап биреп, тегенең ауыҙын шапылдата япҡан, тиҙәр:

-ДНК анализы үткәреп, гонаһҡа батырғамы ни миңә? Ул баланы бит миңә ҡартайған көнөмдә йыуанысым булһын өсөн Аллаһы Тәғәлә бүләк итеп бирҙе. Шулай булғас, анализды Аллаһы Тәғәләнән алырғамы хәҙер миңә, уның изге ғәмәлдәрен шик аҫтына ҡуйырғамы? Юҡ, ундай гонаһҡа батасағым юҡ...



Бына шундай яуап ауылды шымып ҡалырға мәжбүр иткән. Хәйер, әгәр ҙә уларҙың балаһы тыумаған булһа, был никах хаҡында бер ниндәй ҙә ғәйбәт һүҙ һөйләнмәҫ ине лә, был хаҡта, моғайын, беҙ ҙә бер нәмә лә белмәҫ инек. Ә бит кешелек тарихына боролоп ҡараһаң, һикһән йәшлек әбейҙәрҙең дә бәпәйләүе, йөҙөн тултырған ҡарттарҙың да атай булыуы хаҡында бихисап миҫалдар бар. Шуға күрә бында һүҙ кешенең нисә йәшендә атай йә әсәй була алыуы йә алмауы хаҡында түгел, ә дәлилләнмәгән, сәбәбе булмаған хәл-ваҡиғаларҙың, ҡылыҡтарҙың һәм ғәмәлдәрҙең ни рәүешле халыҡҡа һөйләнелеүе, күптәргә еткерелеүе тураһында барырға тейештер. Ҡарттың зирәклегенә лә шаһитбыҙ беҙ был осраҡта.

Беҙҙең яҡта мәрхүмдең өсөнә, етеһенә, ҡырҡына, йылына аят башҡарғанда һәр ваҡыт "фәлән-фәләндең улы", "фәлән-фәләндең ҡыҙы" тигән саҡта әсәй кешенең исеме әйтелә. Башҡа яҡтарҙа, һәр ерҙә лә атай кешенең исеме телгә алына. Ошо хәлдең асылын белер өсөн бер мәл атайым мәрхүмдән һорай ҡуйҙым.

"Әүәле бер гонаһһыҙ саф ҡыҙ бала күлдә һыу ингәндән һуң ауырға ҡалып, бала тапҡан. Кешене донъяға тыуҙырған әсәй кешенең кем булғаны бер ниндәй ҙә шик ҡалдырмай. Тик бала табыу йорттарындағы үтә һирәк яңылыш бала алмаштырыу осраҡтарын ғына иҫәпләмәгәндә, кешене донъяға тыуҙырған әсәй кешене икенсе кеше менән бутау мөмкин түгел. Ә атайҙарға килгәндә, хәл ҡатмарлыраҡ, йәғни балаһы кемдән тыуғанын тик әсәй кеше белгән осраҡтар бихисап. Һуғыш мәлендә бындай хәлдәр күп булған. Шуға күрә лә мәрхүмдең рухына доға, аят һүҙе тәғәйен барып етһен, уны теге донъя ғазаптарынан аралаһын, йәннәткә өлгәшергә ярҙам итһен өсөн дә беҙҙең атай-олатайҙар мәрхүмдең әсәһенең исемен атап доға башҡаралыр инде, күрәһең", - тип аңлатҡайны атайым миңә был ҡыҙыҡлы йола хаҡында. Беҙҙә әле булһын аят мәрхүмдең әсәһенең исемен әйтеп башҡарыла.

Ҡыҙыҡ, ә бит тап ошо йола Ҡөрьәндең "Әл-Әхзәб" сүрәһендәге 5-се аятында яҙылған шартты үтәүгә булышлыҡ итә кеүек. Унда бер кешене икенсе кешенең атаһының исеме менән әйтергә бер кешенең дә хаҡы булмауы хаҡында әйтелә. Тик кешенең ысын атаһын белмәгән осраҡта ғына икенсе кешене уның атаһы тип күрһәтеп яңылышыу унда гонаһҡа тиңләнмәй. Әгәр ҙә был хаҡта күңелдәге насар ниәт менән һүҙ әйтелһә, ул гонаһҡа тиңләнә. Был осраҡта ҙур яза бирелеүе тураһында ла әйтелә был сүрә аяттарында. Хәҙер инде ошо сүрәлә әйтелгән гонаһлы ғәмәлде башҡармаҫ өсөн мәрхүмдең әсәһенең исемен әйтеп, яңылышыуға юл ҡуймауҙы тәьмин итеүгә килһәк, беҙҙең яҡта һаҡланып килгән дини йоланы тик хупларға ғына ҡала. Ошо урында йәһүҙиләрҙең силсиләһе әсә яғынан төҙөлөүе юҡтан ғына килмәгәнлеге лә аңлашыла төшә кеүек. Бында уларҙың хәҡиҡәтте һаҡлар өсөн ошо юлға барыуҙары бәхәсһеҙ тойола.

"Бәндә һөйләр, тәҡдир көлөр" әйтемен икенсе төрлө ябайлаштырып "Тел һөйәкһеҙ, ни уйлаһаң да, һөйләй инде" тип тә әйтәләр. Әйтемдең ябайлаштырылған вариантын ишеткәнен һөйләүсенең аҡланыуы итеп тә ҡабул итергә булалыр. Ысынлап та, нимә ишетәһең, шуны башҡаларға таратаһың да, үҙең быларҙың барыһында ла "телеңдең һөйәкһеҙ булыуына" һылтанаһың. Әммә ишеткәнеңде ни рәүешле итеп кемгә генә һөйләмә, хәҡиҡәтте таныған тәҡдиреӊ бар бит әле. Ул һинең ялғанлауыңа тамаша ҡылып рәхәтләнеп көлә генә бирә. Кеше хаталана, яҙмышы яҙлыға, ә бына тәҡдир тигәнең һис үҙгәрешһеҙ. Кеше ни тиклем ялғанлай, ни тиклем күп алдаша, уның тәҡдире лә шундай уҡ кимәлдә көләкәс булалыр, күрәһең.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Өфө-Арена" спорт комплексында XXI "Газ. Нефть. Технологиялар-2013" халыҡ-ара күргәҙмәһе асылды. Унда Австрия, Германия, Америка Ҡушма Штаттары, Чехия, Бельгия һәм Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында етештерелгән заманса нефть һәм газ ҡорамалдары, төрлө материалдар, махсус кейемдәр һәм башҡа продукция тәҡдим ителде. Форумда даими ҡатнашыусылар фекеренсә, Өфөлә компанияларҙың яңы продукттарын, хеҙмәттәрен һәм эшләнмәләрен киң йәмәғәтселеккә тәҡдим итеү, яғыулыҡ-энергетика комплексын үҫтереү мәсьәләләрен тикшереү, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләү өсөн уңайлы шарттар булдырылған.

✓"Айыҡ ауыл- 2013" республика конкурсында ҡатнашыуға 70 ауыл ғариза биргән. Иң күп ҡатнашыусылар Ауырғазы районынан - һигеҙ ауыл теләк белдергән. Краснокама районынан - алты, Әбйәлилдән - биш, Ҡалтасы районынан дүрт ауыл айыҡлыҡ конкурсында ҡатнашасаҡ.

✓Өфөлә Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич округ мосолмандарының Диниә назараттары етәкселәре менән кәңәшмә үткәрҙе. Экстремистик хәрәкәттәрҙең әүҙемләшеүенә бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатында власть органдары менән дин әһелдәренең берлектә эшмәкәрлек алып барыу стратегияһын әҙерләү һөйләшеүҙең төп маҡсаты булды. Конструктив эшмәкәрлек алып барыу өсөн, округтың Диниә назараттары араһындағы тарҡаулыҡты бөтөрөргә кәрәк, тип билдәләне РФ Президентының Тулы хоҡуҡлы вәкиле, журналистар менән аралашып.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Коррупцияға ҡаршы эш итеү тураһында"ғы, "Дәүләт вазифаһын башҡарыусыларҙың һәм бүтән кешеләрҙең сығымдарының килемдәренә ярашлылығына контроль тураһында"ғы федераль закондарҙың айырым положениеларын тормошҡа ашырыу буйынса саралар хаҡында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Документ Башҡортостандың дәүләт вазифаларын, дәүләт граждандлыҡ хеҙмәте, муниципаль һәм муниципаль хеҙмәт вазифаларын башҡарған кешеләрҙең, уларҙың ир йәки ҡатындарының, шулай уҡ бәлиғ булмаған балаларының сығымдарына контроль тәртибен билдәләй.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАЙҘА БАРАБЫҘ?

## Ҡайҙа барып етербеҙ?

**Өфөнөң 2013-2018 йылдарға ҡаланың Инвестицион стратегияһы тип аталған инвестиция өлкәһендәге программа документы буласаҡ.**

Был хаҡта сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала округы хакимиәтенең урынбаҫары Илдар Хәсәнов менән инвесторҙар, банктар һәм бағыусылар менән хеҙмәттәшлек бүлеге етәксеһе Азамат Сөләймәнов белдерҙе. Был яңы ғына "мейестән" сыҡҡан документты РФА Өфө ғилми үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты менән ҡала хакимиәте берлектә әҙерләгән.

Быға этәрегес биреүсе сәбәптәр ҙә бар. Мәҫәлән, Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында йән башына инвестиция йәлеп итеү буйынса Өфө алтынсы урын биләһә лә, һаман да сит ил инвесторҙарын йәлеп итеү мәсьәләһе ҡиҫкен тора. Нигеҙҙә, баш ҡаланың үсешенә ундағы предприятиелар өлөш индерә, ләкин уларҙы модернизациялау буйынса ла инвесторҙар кәрәк. Икенсе яҡтан, баш ҡаланың инфраструктураһын киңәйтеү ҙә инвесторҙар йәлеп иткәндә билдәле урын ала. Сөнки инвесторҙар тиҙерәк коммуникацияларға тоташып, эш башларға тырыша. Әгәр шулай булмаһа, уларға инвестиция һалыу ҡыҙыҡ түгел.

Быға тиклем баш ҡалала инвестициялар буйынса ҡанундар эшләнә лә, яңы стратегик Программа Өфөнөң әле ниндәй урында тороуын, ҡайҙа барыуын һәм ҡайҙа барып етеүен билдәләйәсәк. Уның төп маҡсаты булып граждандарҙың тормош сифатын күтәреү, уңайлы йәшәү шарттары өсөн мөхит булдырыу һәм баш ҡаланы балансыл һәм имен үсешеүгә ярҙам итәсәк инвестицион проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн уңайлы инвестицион майҙансыҡ булыуын тәьмин итеү тора. Шуның өсөн Программала Өфөнөң башҡаларға танылып торған инвестицион имиджын булдырыу һәм уны күрһәтеү, инвестицион процестың асыҡлығын тәьмин итеү, хоҡуҡи-норматив базаны камиллаштырыу зарурлығына ҙур иғтибар бирелә. Әгәр быға тиклем инвесторҙар нигеҙҙә төҙөлөш тармағын ғына һайлаһа, артабан уларҙы иҡтисадтың төрлө тармаҡтарына ылыҡтырыу күҙҙә тотола. Бының өсөн финанс-һалым өлкәһендә төрлө льготалар, субсидиялар ҡарала. Шулай уҡ быға тиклем артыҡ үсеш алмаған дәүләт-шәхси партнерлыҡ һәм муниципаль-шәхси партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү ҙә иғтибар үҙәгендә тора. Бөгөн баш ҡала инвестицияларҙы текстиль тармағына, мебель эшләүгә, туризмды үҫтереүгә, балалар аҙығы етештереү тармағына йәлеп итергә мөмкин.

Әйткәндәй, Программаның йомғаҡлау бүлеге инвестицион үсештең төп күрһәткестәрен фаразлауға бағышлана. Унда билдәләнеүенсә, 2018 йылда төп капиталға инвестицияләр йәлеп итеү күләме 2012 йыл менән сағыштырғанда уртаса-оптимистик вариант буйынса 89,9 процентҡа үсеп, 159,5 миллиард һумға етеүе күҙаллана.

Шәрифә САЛАУАТОВА.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

**Был һорау хәҙер Рәсәй өсөн "Кем булырға?" һәм "Нимә эшләргә?" тигән риторик һорауҙар рәтен тулыландыра. Сөнки урта һәм йәш быуын өсөн ата-әсәйҙәрҙең, олатай-өләсәйҙәрҙең "бына беҙҙең заманда" тип һөйләүе ҡасандыр борон-боронда булған хәл-ваҡиғалар кеүек ҡабул ителә. Ә бит, уйлап ҡараһаң, был "боронғолоҡ"ҡа бер быуат та үтмәгән. Беҙ - бала, атай-әсәйҙәр йәш саҡта ауылдарҙа, район-ҡалаларҙа ниндәйҙер бер енәйәт ҡылыныуы хаҡында хәбәр ишетелһә, ул ҡот осҡос ваҡиға кеүек ҡабул ителә ине. Бигерәк тә ауылдарҙа хатта йорттарҙа йоҙаҡтар ҙа эленмәгән, ә ишек келәһенә ағас ҡына ҡыҫтырып йөрөгән ваҡыттар ҙа булған. Ә хәҙер әллә үҙебеҙ үҙгәрҙек, әллә заманы шулай: телевизорҙы асһаң - үлтереш тә ҡырылыш, гәзит-журналдарға күҙ һалһаң - шундай уҡ насар хәбәр һәм мәғлүмәт. Уйлап ҡараһаң, сабыйҙарҙың береһе лә енәйәтсе, эскесе йәки наркоман булып тыумай. Тимәк, уларҙың бындай юлға баҫыуҙарында икенсе сәбәптәр бар.**

**Енәйәтселектең структураһында һәм динамикаһында ҡайһы бер айырым кире күренештәрҙең тотороҡло һаҡланып килеүен һәм уларҙың ҡаланың социаль-иҡтисади хәл-торошона кире йоғонто яһауын иҫәпкә алып, 2013-2015 йылдарға Өфө ҡала округында хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү һәм енәйәтселек менән көрәш программаһы раҫланды. Быға тиклем бындай программа 2012 йылға тиклем ҡабул ителгәйне инде. Уның үтәлеше менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Хөрмәт улы Дилмөхәмәтовтың таныштырыуын һораныҡ.**



# ЕНӘЙӘТСЕ БУЛЫП ТЫУМАЙҘАР...

## Ә улар ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң?

### Хәл-торош шундай

Программаның маҡсаты һәм бурыстары урындағы үҙидаралыҡтың һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарының эшмәкәрлеген берләштереү, граждандарҙың именлеген комплекслы тәьмин итеү, халыҡтың урындағы үҙидара органдарына ышанысын арттырыу булһа, уның төп саралары хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү системаһы эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген күтәреүгә йүнәлтелгән. Был сараларҙы тормошҡа ашырыу маҡсатынан өс йылға иҫәпләп ҡала бюджетынан йәмғеһе 21,9 миллион һум аҡса һалынғайны. Бөгөн ныҡлы ышаныс менән шуны әйтергә мөмкин: программаны тормошҡа ашырыу уның һөҙөмтәлелеген раҫланы. Мәҫәлән, 2010-2011 йылдарҙа баш ҡалала енәйәтселектең дөйөм һаны 5,5 процентҡа кәмене. Шулай уҡ йәмәғәт урындарында ҡылынған енәйәттәрҙең кәмеүе лә күҙәтелә (2009 йылда 8248 енәйәт теркәлһә, 2010 йылда был һан 7505 (-743), 2011 йылда 6876 (-629) була). Бәлиғ булмағандар тарафынан ҡылынған йәки улар ҡатнашҡан енәйәттәр һаны ла ҡыҫҡарҙы (2009 йылда - 440 енәйәт, 2010 йылда - 330 (-110), 2011 йылда - 276 (-54). Иҡтисади енәйәтселеккә, терроризм һәм экстремизмға, коррупцияға ҡаршы көрәш көсәйтелде. Ләкин ришүәт алыуға бәйле енәйәттәрҙең 39,7 процентҡа артыуы күҙәтелә. Шулай уҡ элек хөкөм ителеүселәр тарафынан ҡылынған енәйәттәрҙең артыуы ла борсоуға һала. Мәҫәлән, 2009 йылда бындай категория тарафынан 3065 енәйәт ҡылынһа, 2010 йылда - 3221 (+156), 2011 йылда 3440 (+219) енәйәт осрағы теркәлгән. Енәйәттәрҙе асыу күрһәткесе лә кәмеүгә табан бара: 2009 йылда 55,3 процент енәйәт асылһа, 2010 йылда был күрһәткес - 54,6, 2011 йылда 48,4 процент тәшкил итте. Ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәттәр өлкәһендәге хәл-торошто ла үҙгәртеү мөмкин булманы әлегә.

### Реформалар йоғонтоһо

Эске эштәр министрлығы системаһындағы реформа ла эшкә кирерәк йоғонто яһаны, тиергә мөмкин. Баш ҡалала хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең һаны 22 процентҡа ҡыҫҡартылыуы (1200 кеше) эҙһеҙ үтмәне. Уларҙың төп өлөшө йәмәғәт именлеге, участка уполномоченныйҙары һәм бәлиғ булмағандар эше буйынса инпекторҙар өлөшөнә төштө. Мәҫәлән, 2011 йылдан баш ҡалала бәлиғ булмағандар эштәре буйынса 79 инспектор ҡыҫҡартылып, 63 кеше ҡалдырылды. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә бәлиғ булмағандарҙың иҫәбе 188026 кеше тәшкил итә. Шуларҙың 144838-е - 13 йәшкә тиклемге, 43188-е 14-17 йәштәге балалар. Бәлиғ булмаусыларҙың 15 проценты хоҡуҡ боҙоу буйынса тәжрибәгә эйә, йәғни үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла ниндәйҙер ҡырын эш ҡылған.

### Иҫкәртеү саралары

Программа тормошҡа ашырған осорҙа үткәрелгән иҫкәртеү саралары тураһында ла бер нисә һүҙ. Полиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан уҡыусылар, студенттар, уҡыу йорттарының педагогик коллективтары алдында 3445 хоҡуҡи белемде һәм сәләмәт тормошто пропагандалау буйынса лекция һәм әңгәмә үткәрелде. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәләре вәкилдәре менән берлектә наркотиктарҙың зыяны тураһында плакаттар, иншалар һәм рефераттар конкурстары ойошторолдо. Ҡаланың бәлиғ булмағандар эштәре буйынса бүлексәләре хеҙмәткәрҙәре һәм участка уполномоченныйҙары, башҡа белгестәр менән берлектә, киске ваҡыттарҙа йәштәрҙең күпләп йыйылыу урындары, барҙар, кафелар, дискотекаларҙа тикшереүҙәр үткәрә. Төнгө рейдтар барышында бигерәк тә бәлиғ булмағандар тарафынан хоҡуҡ боҙоуҙар һәм енәйәт ҡылыуҙарҙы иҫкәртеүгә, уларҙы хоҡуҡ боҙоуға йәлеп итеүселәрҙе, балаларҙың спиртлы эсемлектәр һәм алйыҡтыс матдәләр ҡулланыуын асыҡлауға айырым иғтибар бирелә. Иҫкәртеү эшендәге сараларҙың береһе - хәрби-патриотик тәрбиә. Бында "социаль хәүеф" төркөмөнә инеүсе балалар һәм үҫмерҙәргә ныҡлы иғтибар йүнәлтелә. Улар менән төрлө әңгәмәләр уҙғарыла, уларҙың эмоциональ хәл-торошо диагностикалана, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҫтереү буйынса дәрестәр бирелә, профессиональ йүнәлеш буйынса тренингтар, эшлекле уйындар ойошторола.

Шулай уҡ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы социаль иҫкәртеү, халыҡты, бигерәк тә кире йоғонтоға тиҙ бирешеүсән социаль категорияны: холоҡ төҙәтеү һәм мәжбүри эштәргә йәлеп ителеүсе граждандарҙы; иректән мәхрүм итеү урындарында бу-

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан вәкилдәре Новосибирскиҙа үткән Рәсәйҙең 12-се Дельфий йәштәр уйындарынан миҙал һәм ике диплом менән ҡайтты. Алтын миҙалға Өфө сәнғәт училищеһынан Айҙар Хәйруллин лайыҡ булды. Шулай уҡ ошо көндәрҙә бында БДБ илдәренең "Сәнғәттә бул!" асыҡ Дельфий йәштәр уйындары тамамланды. Бында алтын миҙалға вокалсы Диләрә Иҙрисова лайыҡ булды.

✓РФ Президенты Хакимиәтенең эш төркөмө Өфөлә 2015 йылда ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәреүгә әҙерлек барышын тикшерҙе. Мәскәү вәкилдәре Конгресс-холда булды һәм бинаға капиталь ремонт үткәреү проекты менән танышты. Форумдарҙа ҡатнашыусыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләһенә айырыуса иғтибар бүленде.

✓Билдәле кутюрье Вячеслав Зайцев Өфө трикотаж фабрикаһы тәҡдим иткән мәктәп формаһы моделдәрен әҙерләүҙә ҡатнашты. Вячеслав Зайцев Өфө осталарының юғары профессионализмын билдәләне. Бөгөнгө көндә фабрикала 20-гә яҡын комплект әҙерләнгән. Мотлаҡ комплектҡа өс-дүрт элемент индерелгән. Бер комплекттың уртаса хаҡы - 2,5 мең һум.

✓Күгәрсен районынан Рафиҡ Ҡотлоғужин Фәтих Иҡсанов исемендәге "Моңға бай гармун байрамы" республика конкурсында Гран-при яуланы. Гармун байрамында Башҡортостан, Удмуртия, Ханты-Манси автономиялы округы һәм Пермь өлкәһенән йәмғеһе 74 кеше һәм 30 ансамбль ҡатнашты. Беренсе урынға ике гармунсы - Учалынан Игорь Сергеев һәм Өфөнән Рәмил Фәйзуллин, ансамблдәр араһында беренсе урынға - Яңауыл районы балалар сәнғәт мәктәбенең тальянсылар триоһы (етәксеһе - Гүзәл Сәбирйәнова) һәм Миәкә районының "Дим" гармунсылар ансамбле (етәксеһе - Фәнир Миһранов) лайыҡ булды. Байрам һуңында Яңауылдың ял паркында гармунға һәйкәл асылды.

✓Өфө ҡала округының Йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү үҙәге 31 майҙа 14.00 сәғәттән 16.00 сәғәткә тиклем "Үҫмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең йәйге осорҙа эш менән мәшғүллеге" тигән темаға 279-06-56 телефоны буйынса тура бәйләнеш үткәрә.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты 28 июндә "Рәсәй йәштәре көнө" айҡанлы Салауат Юлаев майҙанында спорт һәм мәҙәни саралар үткәрә. Сара 17.00 сәғәттә башлана.

лып ҡайтыусыларҙы; 14-18 йәштәгеләрҙе; ҡасаҡтарҙы һәм мәжбүри күсенеүселәрҙе; яңғыҙ һәм күп балалы, инвалид бала тәрбиәләүсе ата-әсәләрҙе; ата-әсәләре икеһе лә эшһеҙ тип табылған ғаилә ағзаларын, интернат һәм балалар йорттарында тәрбиә алып сығыусыларҙы эш менән тәьмин итеүгә лә етди иғтибар бирелә. Мәҫәлән, 2012 йылдың башында ғына 14-18 йәшлек бәлиғ булмаған 7000 бала уҡыуҙан һуң буш ваҡытында эшкә йәлеп ителде.

### Халыҡ үҙе лә ҡатнашһын

Граждандарҙың йәшәү урыны буйынса тәртип һаҡлауға граждандарҙың үҙҙәрен йәлеп итеүгә, хоҡуҡ һаҡлау буйынса йәмәғәт формированиелары ойоштороуға ла ҙур иғтибар бирелде. Ошо йүнәлештәге йәмәғәт ойошмаларының эшен координациялау буйынса 77 социаль-профилактика үҙәге эшләне. 77 йәмәғәт ойошмаһы бәлиғ булмаусыларҙың ҡарауһыҙ йөрөүен иҫкәртеү буйынса ярҙам итте. Уларҙың составына уҡыу йорттары вәкилдәре, йорттарҙың, подъездарҙың башлыҡтары, урам комитеттары рәйестәре, халыҡтың әүҙем өлөшө инде. Был ойошмалар эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше - граждандар күпләп ҡатнашҡан сараларҙа, гәзәттән тыш хәлдәр ваҡытында йәмәғәт тәртибен һаҡлау, бәлиғ булмағандар тарафынан хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү, ҡаланың санитар торошон контролләү тора. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: 2006 йылдан алып баш ҡала граждандарҙың күпләп йөрөгән урынлдарында видеокүҙәтеүҙең автоматлаштырылған системаларын булдырыу буйынса эш алып барыла. Ундағы мәғлүмәт Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса дежур часы идаралығында урынлашҡан мониторҙа сағыла. Өфө ҡала округының торлаҡ хужалығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан да хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү йүнәлешендә ҙур эш алып барыла. Улар тарафынан участка уполномоченныйҙары менән берлектә сарҙаҡтарҙы, подвал һәм башҡа бикле урындарҙы тикшереү даими уҙғарыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҡәлә башында әйтеп үткәнсә, тыуғанда уҡ сабыйҙар енәйәтсе йәки ҡулына шешә тотоп тыумай. Ләкин ошо бер гонаһһыҙ сабыйҙар бер килеп эскесе, наркоман, енәйәтсе мөһөрөн ала. Йәмғиәт был афәт менән әллә күпме сығымдар түгеп көрәшеп ҡарай, һөҙөмтә лә бар кеүек, әммә улар сағыштырмаса ғына. Ирекһеҙҙән, Дон Кихоттың ел тирмәне менән көрәшеүе генә күҙ алдына баҫа. Эйе, төрлө программалар эшләнә, төрлө саралар уҙғарыла, әммә улар барыһы ла айсбергтың өҫкө өлөшө өсөн генә. Ә уның "тамырҙары" тәрәндә икән, тирмән бик оҙаҡ әйләнәсәк әле...**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## "САҠЫРЫЛМАҒАН ҠУНАҠТАР" ҺӨЖҮМЕ

**Былтыр йәй республикаға һөжүм иткән бөжәктәр хаҡында онотоп та өлгөрмәнек, улар тағы ла үҙҙәре хаҡында белгертә башланы. Көндәр йылыныу менән республиканың ҡайһы бер районтарын быға тиклем беҙҙә күренмәгән бөжәктәр баҫып алды.**

Был хәл айырыуса Миәкә районы халҡын борсоуға һала, сөнки унда ҡарышлауыҡҡа оҡшаған ҡара төҫтәге бөжәктәр яңы баш ҡалҡытҡан яҙғы үләндәрҙе ашай. Урындағы халыҡ уларҙың артабан баҫсаларға төшөүенән ҡурҡа. Белгестәр был бөжәктәрҙең исемен аныҡ ҡына әйтә алмай: берәүҙәр уны рапс япрағын ашаусы бөжәк, тип билдәләһә, икенселәр был фекерҙе ҡуртаҡлашырға ашыҡмай. Урындағы халыҡ әйтеүенсә, был бөжәктәрҙе хатта ҡоштар ҙа ашамай, сөнки уларҙан ауыр еҫ килә. Шул уҡ ваҡытта ҡара бөжәктәрҙең һыуыҡҡа сыҙамһыҙ икәнлеге асыҡланған. Һуңғы һыуыҡтар уларҙың рәтен арыу ғына "ҡаҡшатҡан".

Быйыл да республикала, былтырғы кеүек үк, "саҡырылмаған ҡунаҡтарҙың" күп булыуына шарттар яҡшы, ти белгестәр. Айырыуса ҡара сиңерткәнең барлыҡҡа килеү мөмкинлеге хәүефкә һала, ә былтыр йәй меңәрләп осҡан һәм ҙур зыян килтергән энәлек күбәләге быйыл булмаясаҡ, тиген ышаныста белгестәр, сөнки уларҙың "һөжүме" ике йыл рәттән ҡабатланмай. Ауыл хужалығы белгестәре, ҡороҡтостарҙан ҡотолоу өсөн иң ҡулай юл химик матдәләр ҡулланыу, тип белдерҙе.

## ТӘМӘКЕНЕ СИКЛӘҮ - 1 ИЮНДӘН

**Рәсәй Дәүләт Думаһы тейешһеҙ урында тәмәке тартҡан һәм тәмәке продукцияһын һатыу законын боҙған өсөн яҙаны ҡәтғиләштереүҙә сираттағы аҙымды эшләне.**

Депутаттар беренсе уҡыуҙа "Тәмәке тартыу эҙемтәләренән һәм тәмәке есе йоғонтоһонан халыҡтың һаулығын һаҡлау тураһында"ғы Федераль закон ҡабул итеү сәбәпле "Реклама тураһында" һәм "Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проектын ҡабул итте. Уға ярашлы, ағымдағы йылдың 1 июненән тыйылған территория, бина һәм объекттарҙа тәмәке тартҡан өсөн 1000-1500 һум, алыҫ юлда йөрөүсе поездарҙа һәм йәмәғәт транспортында көйрәткән өсөн 1200-1500 һум штраф һалынасаҡ. Ә һауа суднолһында тәмәке тартыусының кеҫәһе 20000-50000 мең һумға һайыҡырға йәки ул 50000-200000 сәғәтлек мәжбүри эшкә йәлеп ителергә мөмкин. Тәмәкене рекламалаған өсөн граждандарға 2-3 мең һум, вазифа биләүсегә 5-20 мең һум, шәхси эшҡыуарға 20-50 мең һум һәм юридик шәхестәргә 100-500 мең һум күләмендә штраф һалыу ҡаралған. Шулай уҡ был осраҡта закон тарафынан шәхси эшҡыуарҙың һәм юридик шәхестең эшмәкәрлеген 90 тәүлеккә тиклем туҡтатып тороу мөмкинлеге лә ҡаралған.

Бәлиғ булмаусыға тәмәке продукцияһы һатҡан өсөн 8 меңдән алып 90 меңгә тиклем штраф һалыу, шәхси эшҡыуарҙың йәки юридик шәхестең эшмәкәрлеген 90 тәүлеккә туҡтатып тороу һәм тәмәке продукцияларын конфискациялау кеүек саралар ҡаралған. Шулай уҡ бөгөнгә көндә күпләп таралған насвайҙы һатыусылар ҙа 2 меңдән алып 50 меңгә тиклем штраф түләйәсәк. Тағы ла бәлиғ булмағандарҙы тәмәке тартыуға йәлеп иткәндәргә лә аҡсалары менән хушлашырға тура киләсәк.

БАШ ЙОРТТА

# СӘСКӘЛӘРҘӘН КҮҘҘӘР ҠАМАША!



**Баш ҡаланың үҙәк урамдарының береһе булған Октябрь проспекты буйлап автобуста бер уйһыҙ китеп барғанымда ҡапыл үҙем өсөн бер хәҡиҡәт астым: баҡһаң, үҙем дә һиҙмәҫтән, юл буйҙарындағы клумбаларға ултыртылған сәскәләргә һоҡланып, онотолоп киткәнмен икән. Ысынлап та, быйыл бигерәк матур баш ҡала урамдарындағы клумбалар: әлеге мәлдә ләлә сәскәләре күҙҙең яуын алып, бар донъяға нур һибеп, төрлө төҫтәрҙә балҡый.**

Бәлки, быға тиклем иғтибар итмәгәнмендер, әммә клумбаларҙағы сәскәләр быҒаса унда берәү, бында берәү булып хәтерҙә ҡалған. Ә быйыл мин уларға икенсе күҙлектән ҡараныммы, әллә ысынлап та шулай булдымы, сәскәләр һәр ерҙә тығыҙ итеп ултыртылған һәм улар әллә ҡайҙан алыҫтан балҡып күренә. Әйтерһең дә, алдында сәскәләр түгел, ә төҫлә ҡул ята һәм уның тулҡындары әкрен генә иҫкән елдә бер-береһен ҡыуышып уйнай. Сәскәләр шулай ел ыңғайына бер-береһенә әйеләп сер һөйләй. Үҙәк баҙар районында ла сәскәләргә һоҡланып ҡарап ҡына торғо килә. Ирекһеҙҙән, Мәжит Ғафуриҙың "Гөлдәр баҡсаһында" тигән шиғыры хәтергә төшә:

*"Бер көн шулай гөлдәр баҡсаһында*
*Сәскәләрҙе ҡылдым тамаша.*
*Хуш еҫтәре менән йән шатлана,*
*Нурҙарынан күҙҙәр ҡамаша.*
*Нәфис төҫтәренә, буйҙарына*
*Хайран ҡалып, ҡыҙығып ҡараным:*
*- Әй, сәскәләр, һеҙгә кемдәр дуҫтар,*
*Кемдәр дошмандар? - тип һораным.*
*Гүйә, улар шунда йөнләнделәр,*
*Нурҙар сәсеп, ем-ем көлделәр.*
*Әкрен генә иҫкән ел арҡылы*
*Миңә былай яуап бирҙеләр:*
*"Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙый,*
*Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,*
*Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле, -*
*Шулар беҙгә дуҫтар! - тинеләр. -*
*Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,*
*Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәйҙәр,*
*Кемдәр килеп беҙҙе хаҡһыҙ өҙә, -*
*Шулар беҙгә дошман!"* - тинеләр.

Бында, әлбиттә, баш ҡаланың ошо матурлыҡ өсөн яуап биргән махсус хеҙмәттәренең эшмәкәрлеген дә баһаламай булмай, сөнки улар һәр кем иртән эшкә барғанда, кисен эштән ҡайтҡанда ошо сәскәләргә ҡарап онотолһон, бер аҙға ғына булһа ла тормош мәшәҡәттәренән арынһын өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләй, ҡара яҙҙан сәскә үсентеләре үстерә, көндәр йылыныу менән уларҙы клумбаларға сығара. Ерҙә ерекҡәнсе уларға даими һыу ҡойоп тора. Бер төр сәскә атып бөтөүгә, икенсе клумбаларҙа икенсе төрләләре күҙҙең яуын ала башлаһын өсөн уларҙы һайлап ултырта. Уйлап ҡараһаң, үҙенә күрә ювелир эшенә тиң хеҙмәт башҡара. Һәм кисә генә буш ятҡан кеүек күренгән урында бер нисә көндән мөғжизә тыуа. Был матурлыҡ бер нисә көн йәки аҙна ғына түгел, ә ҡара көҙ етеп, сәскәләрҙе ҡырау һуҡҡансы бар тирә-йүнгә нурҙар сәсеп ултыра. Беҙгә, баш ҡала граждандарына, ошо матурлыҡты күрә белергә, уны һаҡларға, уға һоҡланырға һәм сәскә үҫтереүселәргә рәхмәтле, сәскәләргә дуҫ була белергә генә кәрәк...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

# БАЛАЛАР ӨСӨН... ҡарағай яҫтығы

Элек балаларға балыҡ майы эсерә торғайнылар. Хәҙер уны эҙләһәң дә, табып булмай. Шуға ла был витаминға бай дарыуҙы үҙем эшләйем. Ярты килограмм башлы һуған алып, өҫтөнә сыҡҡансы үҫемлек майы ҡоям, бер йомортҡа һарыһы, ҡырғыстан үткәрелгән 200 грамм кишер, 200-300 грамм һырғанаҡ емеше өҫтәйем һәм уларҙың бөтәһен дә быу өҫтөнә ҡуйып, бер сәғәт тирәһе быҡтырам. Шунан өҫтөндәге шыйыҡ массаны алып, һауытҡа ҡойоп алам да, һыуытҡыста һаҡлайым.

Был майҙы сабыйҙың аҙығына өҫтәргә кәрәк, көнөнә бер нисә тамсынан башлап бер балғалаҡҡа тиклем еткерергә. Стоматит менән ауырығанда, тән бешкәндә ошо уҡ майҙы ҡулланығыҙ, танауға тамыҙырға була.

Һыуыҡ тейеп ауырыуҙан һаҡлау өсөн балаларҙы "ҡарағай аҫтында" йоҡлатам. Бының өсөн ҡарағай энәләрен йыям, өҫтөнә сыҡҡансы ҡайнар һыу ҡоям һәм 20 минут ултыртып ҡуям, шулай итеп уны балауыҙҙан таҙартам. Шунан һыуын һарҡытып, энәләрҙе киптерәм һәм бәләкәй генә яҫтыҡ эшләйем. Шулай итеп, ул ҡарағай фитонциды менән байыҡтырылған һауаны һулап йоҡлай. Бер йәш тулғас, балаларыма ҡара икмәк сохарийында әҙерләнгән һыуҙы эсерә башлайым һәм шулай итеп уларҙың эсәктәрен һәм нервылар системаһын нығытам.

Гайморит - маңҡалы балаларға атаәсәһе ягынан иғтибар етмәү һөҙөмтәһе. Улар маңҡаһын танау эсенә тартып ала, ә унан бөтөн бысраҡ маңлай ҡыуышлығына эләгә. Бәләкәй балаларҙа танау һөйәгененң киңәйеүен һәм ҡаш өҫтөнөң дуғаланып тороуын күрергә мөмкин. Быны ошондай балаларға "ҡарағай аҫтында" иң беренсе сиратта йоҡларға кәрәк. Икенсе көнөнә ул тағы ла нығыраҡ маңҡалай башлаясаҡ, борсолмағыҙ, дауалауҙы дауам итегеҙ. Ваҡыт үтеү менән баланың маңҡалауы үтәсәк, баш мейеһенең кислородҡа һыуыҡ һауыу бөтәсәк. Балалар баҡсаларында ни эшләп ошондай яҫтыҡтар эшләмәскә һәм унда маңҡалы балаларҙы һалып йоҡлатмаҫҡа?

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Бөҫерле баланы имләү

Бик күп йәш бала бөҫерле була. Бөҫере булһа, бала ал-ял белмәй илай. Уның кендеге ҙурая, күгәрә. Өс айға тиклем бөҫер бөләкәй генә, ҡорт башындай ғына була. Уны халыҡта "сабый бөҫер" тиҙәр. Бөҫерҙе сабый сағында, йәғни өс айға тиклем имләмәһән, ул йәнләнә, тиҙәр. "Сабый бөҫер" ҙе хәҙрәттән өшкөртөп алған таш менән төртқөләп бөтөрөп була икән. Шул таш менән бөҫер доғаһын уҡып төрткөләһән, бөҫер йәнләнмәй, тиҙәр. Балаға өс ай булғас, бөҫер йәнләнә. Был осраҡта ул баланың эсендә йөрөй башлай. Бөҫер кендек, сандыр, күкрәк пәрҙәһе, баш һәм арҡа мейеләренә лә барып етә, тиҙәр. Бөҫер ҡайһы ерҙә йөрөй, баланың шул ере ауырта икән. Йәнләнгән бөҫерҙе халыҡ баҡа кеүек тарбаҡ-тарбаҡ бер йән эйәһе итеп күҙ алдына килтерә. Төҫө буйынса бөҫер өс төрлө була: һары, ҡара һәм аҡ. Был бөҫер имләү һамағында сағылыш тапҡан:

*Ҡара бөҫер,*
*Аҡ бөҫер.*
*Унда ятма,*
*Бында ят,*
*Ҡил, сыҡ!*

Йөрөгән, ауырттырған ере буйынса бөҫерҙе кендек бөҫеренә, сандыр бөҫеренә, күкрәк пәрҙәһе бөҫеренә, арҡа мейеһе бөҫеренә, баш мейеһе бөҫеренә бүләләр.

Им-том иткәндә иң тәүҙә бөҫерҙе йөрөтөүҙән туҡтаталар. Бының өсөн туң майға тәмәке ҡушып иҙәләр ҙә сепрәккә һалып, кендекте бәйләп ҡуялар. Шулай уҡ туң майҙы ҡоротҡа иҙеп эсереү ҙә ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, туң май бөҫерҙе ҡаплай һәм ул эстә йөрөй алмай икән.

Бөҫерҙе йөрөтөүҙән туктатҡас, уны имләп, махсус доғалар әйтеп, эстән сығарырға тырышалар. Бөҫерҙе балаға өс ай булмаҫ борон имләргә кәрәк. Сөнки ул һуңынан аҙа, үрҙә әйткәнсә, йәнләнә, тиҙәр. Бөҫер им-томон, гәҙәттә, имсе әбей башҡарған. "Ҡайһы бер яҡтарҙа игеҙ бала әсәһе йәки кендек әбейе им-том иткән. Бөҫерҙе, гәҙәттә, хәҙрәттән өшкөртөп алынған таш, яҙыу, бала атаһының ойоҡбашы, миндек осо менән төртқөләп имләйҙәр. Хәйбулла яҡтарында бөҫергә ҡор ташы ҡырып ашатыу за киң таралған. Башҡорт телендә йөрөгән һүҙбәйләнештәрҙә бөҫерҙе ҡыуып (бөҫер ҡыуыу), тотоп (бөҫер тотоу), өшкөрөп (бөҫер өшкөрөү), ырымлап (бөҫер ырымлау), имләп (бөҫер имләү) бөтөрөүгә ишара бар. Башҡорттарҙа бик күп бөҫер бөтөрөү ысулдары булған. Түбәндә шуларҙың бер нисәһе килтерелә.

### Бөҫергә доға яҙып эсереү

Бөҫергә доға яҙып та эсерәләр. Химик ҡәләм менән дәфтәргә боронғоса доғаһын яҙалар. Шул яҙыуҙы шешке аҫтына ғына һалалар ҙа, һыу ҡойоп, балаға эсерәләр. Шунан бөҫер бермә-бер бөтә.

### Бөҫер ташы менән имләү

Аҡбалина олатаһының бөҫер имләүен ошолай һөйләгәйне: "Ауылдарҙан килеп олатайыма бөҫер имләтә торғайнылар. Уның бөҫер ташы бар ине. Ул уны тау битләүендә булған мәмерйә өңөнән ала ине. Унда беҙ ҙә, бала-саға, бара торғайныҡ. Барып, өңөлгән ерен бармаҡ менән тырнаштырып, һыйпап ҡарай торғайныҡ. Ул ҡомлораҡ әскелт бер таш ине. Шул ташты олатайым ҡырып алып, әллә ниндәй доғаларын уҡып, бөҫерле кешеләргә ашата ине. Бөҫер бөтә торғайны. Нимәнән булғандыр, таштан бөткәнме, доғананмы, уныһын белмәйем".

Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.
(Дауамы бар).

УЙЛЫҒА - УЙ

**Асҡар үҙәк китапханаһында республиканың ике ҙур журналы - "Ватандаш" һәм "Шоңҡар"ҙың мөхәррирҙәре Азамат Юлдашбаев һәм Мөнир Ҡунафин менән осрашыу үтте. Улар "Шоңҡар" ойоштороған "Күрше хаҡы - тәңре хаҡы" бәйгеһенең еңеүсеһе, шағирә Гөлшат Әхмәтҡужинаға һәм уның мәҡәләһе геройҙары Роза һәм Миҙхәт Ласыновтарға махсус приз тапшырырға килгәйне.**

# ФЕКЕР ЭҘЛӘРГӘМЕ...
## әллә мәғлүмәте лә еткәнме?



Ошо унайҙан китапханаға райондың "Йәйғор" әҙәби ойошмаһы ағзалары, журналдарҙың уҡыусылары йыйылды. Мөхиррирҙәр килгәс, әлбиттә, һүҙ бөгөнгө матбуғат хаҡында ла барҙы. Тик ҡунаҡтар Баймаҡтағы призерҙары янына ашығыу сәбәпле, барыһын да тыңлай алманылар. "Йәйғор"сыларҙан ни бары Флүрә Низамова менән Радик Өмөтҡужин ғына үҙҙәренең фекерҙәрен ишеттерергә өлгөрҙә баш мөхәррирҙәргә. Флүрә Усман ҡыҙы республика баҫмаларының, бер-береһен уҙҙырып, китап булып донъя күргән әйберҙәрҙе баҫа башлауын тәнҡит утына тотто. "Кемгә кәрәк, шулар уларҙы күптән китап көйө алып уҡыған инде. Матбуғатта яңы әҫәрҙәргә урынды күберәк бүлергә кәрәк", - тине ул. Радик Исмәғил улы иһә: "Кеше гәзит-журналдарҙан ике әйбер - мәғлүмәт һәм фекер эҙләй. Тик һуңғы осорҙа матбуғат хеҙмәткәрҙәре тәүгеһе менән мауығып, һуңғыһына иғтибар бирмәй. Беҙҙең баҫмаларға фекер етешмәй", - тине. Әлбиттә, уның менән бәхәсләшеүселәр ҙә табылыр ине, тип уйлайым. Сөнки таныштарымдың береһе: "Гәзиттә мәғлүмәт кенә бирергә кәрәк. Хәбәрсе үҙенең фекерҙәре менән бутҡа бешереп, мәҡәләһен оҙон һәм уҡымһыҙ итә. Мине, мәҫәлән, уның теге йәки был мәсьәлә буйынса нимә уйлауы бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Фекер, журналист бирған мәғлүмәттән сығып, минең башымда тыуырға тейеш", - тигәйне. Был кеше лә үҙенсә хаҡлы кеүек...

Әммә мин үҙем дә, нәҡ Радик Өмөтҡужин ише, матбуғат биттәренән аҡыллы, матур, дөрөҫ фекер эҙләүсе кеше. Был йәһәттән - бер уҡ ялағайланыу тип аңламағыҙ - мин башҡорт баҫмалары араһында "Киске Өфө"нө иң фекерле гәзит тип атар инем. Хәйер, мин генә түгел инде. Әлеге осрашыу һуңында мин матбуғат баҫмаларына йыш яҙышҡан бер ханымдан: "Һеҙҙең мәҡәләләр баҫылмаған гәзит-журнал юҡ тиер инем, бирәү бар: ниңә "Киске Өфө"гә генә яҙмайһығыҙ ул?" - тип һораным. Ул: "Үтә рухлы, төплө фекерле гәзит, мин үҙемде уның кимәленә еткәнмендер, тип уйламайым", - тип, шулай уҡ "Киске Өфө"гә юғары баһа ҡуйҙы.

Республика матбуғаты менән даими ҡыҙыҡһынып барыусы булараҡ, шуны әйтә алам: "Киске Өфө"нө кеше йә ярата, йә һөйһөнмәй. Уртала торғандар бик һирәктәр. Һөйһөнмәүселәр уның үтә ҡатмарлы йөкмәткеле булыуын, теле лә бик үк аңлайышлы түгеллеген билдәләй, айырым кешеләр өсөн сығарылған баҫма ул, тип һанай. Мин үҙем дә элегерәк: "Ниңә ошо "Киске Өфө"нө ябайыраҡ, халыҡҡа яҡыныраҡ итеп сығармайҙар икән? Шулай булһа, уҡыусылары ла күберәк булыр ине бит," - тип уйлай торғайым. Ләкин гәзиттең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваның бер интервьюһында: "Беҙҙең баҫмаларҙың, радио-телевидение тапшырыуҙарының, театр тамашаларының төп бөләһе шул: һәр ваҡыт иң түбән йә уртаса кимәлгә иҫәп тотола. Ни өсөн беҙ, ижад кешеләре, уҡыусыны, тыңлаусыны йә тамаша ҡылыусыны үҙебеҙҙән назаныраҡ тип уйлайбыҙ? Түбәнерәк икән, ниңә уҙ кимәлебеҙгә күтәрелергә ярҙам итмәйбеҙ?" - тигән юлдарын уҡығандан һуң уның һәм гәзиттең позицияһын аңланым һәм хөрмәт итә башланым.

Зыялылар баҫмаһы тип һанаһам да, мин үҙем "Киске Өфө"нө уҡырға ни бары ун класс белеме булған, ғүмер буйы заводта эшләгән Рәзилә апай Фәттәхованан өйрәндем. Ул гәзиттең һәр яңы һанын киоскынан һатып ала бара. "Киске Өфө", башҡалар кеүек, бер тотҡанда уҡып сыға торған баҫма түгел. Уны яйлап, һәр һүҙенең мәғәнәһен төшөнөп, аҙна буйы уҡырға кәрәк. Шунда уның һәр мәҡәләһендә мәғәнә табаһың. Шуға гәзиттең аҙнаһына бер сығыуы бик отошло", тигәйне апайым. Хәҙер мин дә шулай итәм: бүлә-бүлә, аҡылын һеңдерәһеңдерә уҡыйым мәҡәләләрҙе, үтә оҡшағандарына кире урап та ҡайтам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙемде Асҡар китапханаһында үткән осрашыуҙан башлағайным. Мөхәррирҙәр китте, ә беҙҙекеләр бер йыйылыуын йыйылғас, "быу сығарып", матбуғат баҫмаларына үпкәләрен йә хуплауҙарын белдереп, оҙаҡ гәпләшеп ултырҙылар. Их, был һөйләшеүҙе бөтә гәзит-журналдарҙың мөхиррирҙәре лә тыңлап ултырһын ине, үҙҙәренә бик күп фәһемле һығымталар яһарҙар, ябай уҡыусыға ысынында нимә кәрәген аңларҙар ине, тип уйлап ҡуйҙым мин. Барыбер ҙә матбуғат баҫмалары журналистары, мөхәррирҙәре менән уҡыусылар араһында ошондай бер-береңде аңлауға өлгәштерерлек бәйләнеш юҡ шул әле беҙҙә. Ҡыҙғаныс шуныһы.**

Рәхимә МУСИНА.
Әбйәлил районы.

ШАҢДАУ

# "ҠОШ ТЕЛЕ" АРАЛАНЫ



**Гүзәл Ситдиҡова менән Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың әйберләтә яҙма, ҡош теле хаҡындағы әңгәмәһе йәш сағымды иҫкә төшөрҙө. Әңгәмәнең икенсе өлөшөн дә күрге, уҡығы килә.**

Ысынлап та, әйберләтә хатлашыу беҙҙең йәш саҡта ла булды. Берәй егет киске уйынға ҡыҙҙы саҡырырға теләһә, ниәтен тел менән әйтмәй ине. Ул был саҡта әхирәте аша күршеһендәге танышы аша берәй әйбер ебәрә ине. Алып килгән кеше аманатты тапшырған саҡта уның кем тарафынан ебәрелеүен әйтә. Ә ҡыҙ кешегә егет алдан оҡшаған булһа, әйберҙе алып ҡала һәм кисен үҙенә кире бирә, алмаһа, тимәк, был егетте ҡыҙ оҡшатмай һәм уның менән киске уйында осрашмай. Был, бер яҡтан, үҙ-ара аңлашылмаусылыҡтан ҡотҡара, ни тиһәң дә, бер ниндәй хилафлыҡ та юҡ, сөнки егет ҡыҙ менән әле осрашмаған. Сөнки беҙ йәш саҡта, ни өсөндөр, шундай ҡанун ине: ҡыҙ киске уйынға сыҡҡан көндән ниндәй егет менән йөрөй башлай, ул был егеттеке тип һанала ине. Икенсенән, ҡыҙ үҙе туранан-тура егет оҡшаһа, һин оҡшайһың, тип әйтә алмай бит инде. Ә былай, әйберен алғас, ул егеттең оҡшағанын ике кеше генә белә. Хәҙер был мәсьәлә нисектер, мин белмәйем.

Беренсе мөхәббәтем класташым ине. Ул егет тә мине оҡшатҡан булһа кәрәк, ун беренсене бөткән ваҡытта әхирәтем аша үҙенең кесә тарағын миңә ебәрҙе. Тараҡты алып ҡарағайным, эй-й-й-й, тештәренең араһы тулы бысраҡ. Әхирәтемә кире илтеп бирҙем. Яратманым да ҡуйҙым. Мөхәббәт тигән нәмә ҡайҙалыр осто ла китте. Теге егет аҙаҡтан төрлө кешеләр аша төрлө әйберҙәр ебәреп ҡараны, башҡаса ебәргән әйберҙәрен ҡулыма ла алманым. Ике тапҡыр өйләнде ул. Әле ике кәләшенең береһе менән дә тормай шикелле. Тегендә лә, бында ла бала. Йүнһеҙ кеше булып сыҡты.

Шулай итеп, мине ана шул әңгәмәлә һүҙ барған "ҡош теле" аралап алып ҡалды йүнһеҙ кейәүҙән.

Кәримә ХӘСӘНОВА.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Башҡорт халкының йәшәү дәүерендә күргән, кисергәндәрен ҡыҫҡа ғына мәҡәләлә яҙып, һөйләп бөтөрөрлөк түгелдер. Ләкин һәр быуынға, аңы иңләй алырлыҡ дәирәләрҙә, ата-бабаларының йәшәйешендәге киләсәк быуындарҙың яҙмышына йоғонто яһарлыҡ мөһим хәл-ваҡиғаларҙы барлап, халкы кисергәндәрҙе байҡап, һығымталар яһап, бөгөнгө тормошта шул уҡ хаталарҙы ҡабатламаҫ, дәүер боҙоҡлоҡтарына бирелеп, киләһе быуындарынан ҡәһәрләнмәҫ өсөн, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, һабаҡ алып тороу кәрәктер, биллаһи. "Иҫтәренә төшөр. Иҫкә төшөрөп тороу — сауап, иманлыларға файҙа", тиелә бит хәҙистәрҙә лә. Был мәҡәләмдә ҡайһы бер тарихи фактарҙы иҫкә төшөрөп үтәйем әле, тинем.**

# КҮПТЕ КҮРГӘН, КҮПТЕ КИСЕРГӘН...

## йәғни Башҡорт тарихының ҡайһы бер биттәрен барлау

"...Башҡорт иле Каспий диңгеҙенә ҡойоусы йылғаның үрге башында күрһәтелә. Ул илдең Ҡораҡая, Касра һәм Масра исемле өс ҙур ҡалаһы бар. Башҡорттар - нык ихтыярлы һәм батыр инсандар (Географ Шәриф-Иҙриси).

" ...Башҡорттар - үҙаллы халыҡ. Волга, Кама, Тубыл, Яйыҡтың үрге ағымы араһындағы Урал тауҙарының ике яғындағы территорияны биләй" (Ибн-Русти, ғәрәп сәйәхәтсеһе).

"...Башҡорттар тәбиғәт тарафынан иҫ киткес аҡылға эйә, шулай уҡ уларға үҙһүҙлелек, ышанмаусанлыҡ, саялыҡ, ҡырыҫлыҡ та хас. Шул яғы менән ҡурҡынысыраҡ та был халыҡ..." ("Башҡорттар", очерк. Иоганн Готлиб Георги - 1729 йылда Трептов ҡалаһында тыуған, 1770 йылда Фальк менән Рәсәй төбәктәрен өйрәнә).

...Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғанда (1557 йыл) төҙөлгән килешеүҙәр батша хөкүмәте тарафынан артабанғы йылдарҙа хыянатсыл һәм ҡырағай рәүештә боҙолоуы башҡорттарҙы үҙ хоҡуҡтарын яҡлап яуға күтәрелергә мәжбүр итә.

1572 йылдағы тәүге күтәрелеш ҡанға батырылып баҫтырыла;

1662-1664 йылдарҙағы баш күтәреү килешеү менән туктатыла;

1682-1684 йылдарҙағы болалар ҙа ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы күтәрелә;

1704-1711 йылдарҙа башҡорттарға 72 төрлө яңы, шул иҫәптән мейескә, мөрйәгә, тәҙрәгә, ҡамытҡа, дуғаға, мәкегә, туйға, мәсеткә йөрөүгә, хатта күҙҙәр төҫөнә һалым индерелеүенә ҡаршы бөрйән ырыуының тарханы Алдар батыр Иҫәкәйев етәкселегендә 30 мең башҡорт яуға күтәрелә. Һөҙөмтәлә, тәүге тапҡыр тип әйтерлек, халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡлаусы байтаҡ әһәмиәтле килешеүҙәр төҙөлә, һалымдар һаны кәметелә.

1730 йылдың 17 мартында христиан динен яҡлау һәм башҡа халыҡтар араһында таратыу тураһында батшабикә Анна Иоановна тарафынан махсус манифест иғлан ителеүе күп халыҡтарҙың ғәҙәти йәшәү рәүешен үҙгәртеүгә килтерә (бөгөн дә урыҫ телен яҡлау һылтауы менән милли телдәрҙе уҡытыуға төрлө ҡаршылыҡтар тыуҙырыла). Урыҫ булмаған халыҡтарҙы православие диненә күндереү өсөн төрлө дәртләндереү, ҡурҡытыу саралары ҡулланыла. Мәҫәлән, енәйәт ҡылғандарҙы хөкөмдән (хатта үлем язаһынан да!), ирегеттәрҙе рекрутлыҡтан, бөтә һалымдарҙан азат итеү, керәшендәргә ер, мал-мөлкәт биреп, урыҫтар араһына күсереп ултыртыу киң ҡулланыла. Шул уҡ манифест буйынса, мәҫәлән, 1742-1743 йылдарҙа ғына Өфө, Ҡаҙан, Себер, Ырымбур, Әстерхан, Тубыл ерҙәрендә халыҡҡа иман нуры таратып торған 545 мәсет яндырыла, ҡыйратыла.

1745 йыл аҙағына суҡынғандар һаны 50430 кешегә еткерелә. Төрлө халыҡ иҫәбенән иң күп суҡыныу осраҡтары 1746 һәм 1747 йылдарҙа теркәлгән: 73969 һәм 113392 кеше.

1762 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса, Ҡаҙан губернаһында 42 мең 185 ир-аттың ҡайҙалығын асыҡлай алмайҙар (улар иҫәбенә шул тиклем ҡатын-ҡыҙҙы ла ҡушҡанда был һан 84 мең кешенән артып китә). "...Элек Казан губернасы халкы арасында татарлар 22,2 процент тәшкил итсә, 1762 елда бу күрсәткеч 20,1процентка кәдәр кими. Татарлар саны арткан урыннар да бар. Бигрәк тә Уфа, Минзәлә, Бөгелмә, Ырынбур өязләре" ("Яңа керәшен кантуры". Ф.Ислаев, "Казан утлары" № 10, 12, 2012). Был хәл ул мәлдәрҙә татарҙарҙың киң башҡорт ерҙәренә, суҡындырылыуға ҡаршы нык тора алған башҡорттар араһына тотош ғаиләләре, нәҫел-нәҫәптәре күпләп ҡасып килеп урынлашыуҙары менән аңлатыла.

1735-1740 йылдарҙағы, батша ярандарының диндә ҡыҫырыҡлауы, халыҡты аяуһыҙ талауына ҡаршы күтәрелгән яуҙар баҫтырылғас, башҡорттарҙың 880 ауылы яндырыла;

Ырымбурҙа генерал Урусов бойороғона ярашлы 7455 башҡорт үлтерелә, 135 кеше каторгаға ебәрелә, 2882 ҡатын-ҡыҙ ҡоллоҡҡа һатыла, 300-ҙән ашыу ауыл яндырыла, менәрләгән баш мал-тыуар талап алына;

Минзәләлә генерал Соймонов карателдәре тарафынан 9458 башҡорт язалап үлтерелә, 3101 ир каторгаға оҙатыла, 6309 ҡатын-ҡыҙ һәм бала ҡоллоҡҡа һатыла, 396 ауыл яндырыла, талап алынған мал-тыуар, мөлкәт суҡынған татар, мишәр, мари, удмурттарға бүлеп бирелә;

Ҡаҙағстанға ҡасҡан 432 башҡорт тотолоп, үлтерелә, 1862 кеше ҡоллоҡҡа һатыла;

Мосолмандар күпләп йәшәгән төрлө төбәктәрҙә халыҡ алдында фетнәсәлектә ғәйепләнгән әсирҙәрҙең танау, ҡолаҡ, телдәрен ҡырҡып, башҡаса ҡырағайҙарса язалап, ҡурҡытып, талап, аяуһыҙ ҡырып, башҡорттарҙы бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшенән мәңгелеккә төңөлдөрөү өсөн барыһы ла эшләнә. Мәҫәлән, халыҡтың күтәрелеүенә башҡаса юл ҡуймау маҡсатында 1737 йылда батша указы менән башҡорттарға үлем язаһы аҫтында:

1. Тимерлектәр тотоу һәм ҡорал эшләү тыйыла;

2. Халыҡтың үрсеүен кәметеп, нәҫелен көсһеҙләндереү йәһәтенән, 17 йәштән 45 йәшкә тиклем ирҙәрҙе мәжбүри ғәскәр сафына рекрутлыҡҡа алыу ҡарала;

3. Халыҡтың берҙәмлеген тарҡатыу маҡсатында, ихтилалдарҙа ҡатнашҡан өсөн ҡырылған, яндырылған, ауылдарынан ҡыуылған башҡорттарҙың ерҙәренә икенсе тарафтарҙан урыҫ йә суҡынған башҡа милләт ғаиләләре күсереп ултыртыла.

Ер, йорт, мал-тыуар, аҡса, бүләктәр биреү, бөтә һалымдарҙан азат итеү, ә шул шарттарға ла ризалашмағандарҙы хатта үлем язаһы менән ҡурҡытыу, янауҙар менән алып барылған урыҫлаштырыуға ҡаршы 1755-1756 йылдарҙа Өфө өйәҙендә Батырша мулла күтәргән ихтилал ҡанға батырылып баҫтырыла. Ләкин ихтилал баҫтырылһа ла, халыҡтан керәшендәр өсөн өҫтәмә һалымдар йыйыу, рекрутлыҡҡа алыу тыйыла, емерелгәндәре урынына яңы мәсеттәр төҙөү рөхсәт ителә. Батырша ғәскәре яулаған еңеү һөҙөмтәһендә, башҡа күрше (яуҙа ҡатнашмаған) халыҡтар ҙа батшалыҡ һәм сиркәүҙәр тарафынан иҙелеү, баҫылыуҙан ҡотола. Башҡорттар яуға күтәрелеп, үҙҙәренең генә түгел, күрше халыҡтарҙың да хоҡуҡтары өсөн ҡан түгә.

**Урал МОСТАФИН.**

**(Дауамы бар).**

**1739-1742 йылдарҙа Иҙел буйы халыҡтарын суҡындырыу һөҙөмтәһе**

| Халыҡтар | 1739 йыл | 1740 йыл | 1741 йыл | 1742 йыл | Бөтәһе |
|---|---|---|---|---|---|
| Мордвалар | 46 | 58 | 3808 | 7101 | 11013 |
| Сыуаштар | 43 | 65 | 617 | 1025 | 1750 |
| Мариҙар | 71 | 110 | 3785 | 4136 | 8102 |
| Татарҙар | 39 | 39 | 143 | 88 | 309 |
| Удмурттар | 4 | 29 | 806 | 8 | 847 |
| Башҡорттар | 3 | 7 | — | — | 10 |
| Йәмғеһе | 206 | 308 | 9159 | 12358 | 22031 |

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Умарталарҙы урманда ағастарға элеү тәүҙән уҡ солоҡсолоҡ характерын алған. Әммә уларҙы күҙәтеү, ҡорттарҙы ҡарау, тәрбиәләү, күстәрҙе айырыу мөмкинлеге булмаған. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй генә урында күп умарта урынлаштырыу бал урлауҙан ҡурсалау мөмкинлеге биргән һәм был умарталар ерҙә ултырған утарға күсеү формаһы булып торған.

Умарталыҡ йәки утар өсөн урманда ел булмаған майҙансыҡ, һирәк ағаслыҡ һайланған. Бал ҡорттары умарталарға урынлаштырылған, умарталар махсус умарта аҫты ташына йәки ағасҡа беркетелгән йәки ергә ҡағып ҡуйылған ҡаҙыҡ (һүрәт) өҫтөнә ултыртылған.



Умарталар ҡарама, йүкә, уҫаҡ, өйәңке, имән йәки ҡарағай ағастарынан яһалған. Уларҙың бейеклеге - метр ярымдан ике метрға, диаметры 70 сантиметрҙан 1 метрға тиклем булған. Умарта уртаһындағы оҙон ярыҡ ике киҫәк таҡта - бербереһе өҫтөнә ҡуйылған һәм махсус агас сөй менән нығытылған ҡапҡаҡ менән ҡапланған. Умартаның өҫкө өлөшөндә ҡолаҡ эшләнгән һәм уның ярҙамында умарта ағасҡа йәки ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуйылған. Умартаның эсендә арҡыс-торҡос итеп рәтә йәки тағарау урынлаштырылған. Улар балауыҙҙы тотоп торған. Өҫкө бүлектә кәрәҙҙе тотоу өсөн тырма беркетелгән. Умартаның өҫтөнә туҙ ябылған һәм ул таш йәки ауыр предмет менән баҫтырып ҡуйылған. Ҡабырғанан, квадрат кейә эргәһенә бал ҡорттары умартаға инһен өсөн оҙон кейә ҡалағы ҡуйылған. Уның бер осо эске стенаға тейеп торһа, икенсе осо тышҡа сығып торған һәм уның осона сытырсатырҙан щетка бәйләнгән.

Умарталыҡта йәки уға яҡын асыҡ урында ҡорт ҡараҫҡыһы йәки ҡорт һарығы урынлаштырыла. Улар дүрт ҡаҙыҡҡа иңкеү итеп ҡуйылып, ҙур булмаған ҡайыр пластиналарынан ғибәрәт булған йәки ҙур булмаған ағастарға нығытылған туҙҙы тәшкил иткән. Күстән сыҡҡан бал ҡорттары шуларға ултырған. Бал ҡорттары июнь һуңынан күс айыра башлағас, был ваҡытка умарталар, әйрә һәм ҡорт тубал, ҡортсолоҡта кәрәк булған күҙелдерек һәм башҡа кәрәк-яраҡты әҙерләп ҡуйғандар.

Умартаны солоҡ эшләгәндәге ҡоралдар ҡулланып яһағандар. Иҫке умарталар йышҡы менән йышылып, кәрәҙ менән тултырылған. Селтәрҙәре ҡара аттың ялынан ишелеп, киндер туҡыма тегелгән киң ҡабыҡ ҡулсаға тарттырылған. Ҡорт тубал йәки моҙға төрлө формала һәм ҡоролошта булған. Ул ҡабыҡтан тәрән тырыз, тотошлайы менән ҡабыҡтан һәм иләк кеүек төплө яҫы, эллипс йәки селтәр иләкле ярым цилиндр рәүешендә булған.

Айырылған күсте оҙон туҙ ҡашығы менән һоҙғандар. Һоҙоп алғас, уларҙы ҡорт тубалға урынлаштырғандар һәм ҡорт сепрәге менән бәйләп ҡуйғандар. Күс шунда кискә йәки таңға тиклем торған. Инә ҡорт махсус ҡорт сымылдығында эҙләнгән. Табылғас, уны инә ҡорт ситлегенә ултыртып, умартаға урынлаштырғандар һәм уны унда күс умартаға эйәләшеп, бал йыя башлағансы тотҡандар.

***✓ Ләкин былай тип уйлау тулы мәғәнәһеҙлек, сөнки йылына бер тапҡыр эсһәң дә, көн һайын ауыҙыңа ҡойһаң да - һин алкоголь ҡулланыусы, йәғни эскесе. Ошо хәҡиҡәтте күптәр ҡабул итмәй һәм яңылыша.***

# БЕР ЙЫЛҒА БЕР ЭҪӘҢ ДӘ...

## һин барыбер эскесе

**Алкоголь эсемлектәр, уларҙың кеше һаулығы өсөн зарары хаҡында бихисап китаптар яҙылған, уларҙың барыһын бергә йыйһаң, һәр кешегә, кәмендә, өсәр-дүртәр берәмек тура килер ине. Бигерәк тә һуңғы ваҡытта ундай баҫмалар күбәйҙе. Ләкин оҙаҡ йылдар эскелек һаҙлығында йәшәгән йәмғиәттең күҙен асыу китаптың ғына хәленән килә торған эш түгел. Китап менән бер рәттән, күҙгә күренгән, ҡапшап ҡарарҙай аныҡ миҫалдар булыуы мөһим. Айыҡ тормош алып барған кеше, иҫерткес эсемлектәр ҡулланмаған ғаилә, араҡыны бөтөнләй инҡар иткән ауылдар - бына улар ыңғай тәьҫир итеү көсөнә эйә өлгөләр. Һуңғы ваҡытта ундай ғаилә һәм ауылдарҙың күҙгә күренеп артыуы шатландыра. Бигерәк тә йәштәр араһында айыҡ тормош алып барыусыларҙың күбәйеүе яҡын киләсәктә был яуыздың бөтөнләй юҡ булыуына ышаныс бирә. Гәзит уҡыусылар иғтибарына ошондай йәш ғаиләләрҙең береһе - Элина һәм Руслан ЯҠУПОВтар менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**▸ Алкоголь һәм уны ҡулланған кешеләр тураһында ниҙәр әйтер инегеҙ?**

**Элина:** Алкоголде мин, ысын мәғәнәһендә, ағыу тип билдәләр инем. Аныҡлап әйткәндә, ул айырым кеше йәки ғаилә өсөн генә ағыулы түгел, ә тотош йәмғиәткә оло зыян килтереүсе. Героин, дезоморфин һәм башҡа төрлө наркотик матдәләргә ҡаршы күптән инде көслө көрәш алып барыла, хатта бының өсөн махсус ойошмалар булдырылған, әллә күпме аҡса түгелә. Ә алкоголь быға тиклем бындай "яҙмыштан" ҡурсаланып килде. Шул уҡ ваҡытта уның, бәлки, наркотиктарҙан да ҡурҡынысыраҡ һәм хәүефлерәк афәт икәнлеген уйлаусы ла, был хаҡта өндәшеүсе лә булманы тиерлек. Ә саң ҡағырға күптән кәрәк ине, сөнки ниндәйҙер ауыр эҙемтәләрҙе йырып сығырға тырышыуға ҡарағанда, уға юл ҡуймау күпкә һөҙөмтәлерәк. Ләкин, нисек кенә булмаһын, бөгөнгө көндә бөтә ил буйынса алкоголь тигән яуызға ҡаршы көрәш иғлан итеү һәйбәт һәм ыңғай күренеш.

**Руслан:** Алкоголь ҡулланыусы кеше - оҙайлы һәм ышаныслы килем килтереүсе сығанаҡ, сөнки наркомандан айырмалы рәүештә, ул тиҙ генә эшләү һәләтен юғалтмай һәм бер-нисә йыл эсендә яҡты донъя менән хушлашмай. Иҫерткес эсемлектәр ҡулланһа ла, ғаилә ҡора, балалар үҫтерә, донъяһын алып барырға тырыша. Шуға күрә, әлегә тиклем алкоголде ҙур ҡаза итеп күреүсе, уның менән көрәшергә, уны юҡ итергә тырышыусы дәүләт булманы. Мәҫәлән, беҙҙең илдә, киреһенсә, үткән быуаттың 90-сы йылдарында аңлы рәүештә халыҡты эскелеккә этәрҙеләр, йәғни ул ваҡытта дәүләт башында тороусылар илдәге эшһеҙлек проблемаһын һәм йәшәү кимәленең түбән булыу мәсьәләһен хәл итеү урынына, йәмғиәттең аңын томалауҙы ҡулайыраҡ күрҙе.

**▸ Үҙен "Мин мәҙәни эсәм", тиеүселәр бихисап. Быны нисек аңларға була? Ғөмүмән, эскелекте "мәҙәни"гә һәм "мәҙәниәтһеҙ"гә бүлеп буламы?**

**Руслан:** "Мәҙәни эсеү" тигән төшөнсә алкоголь ҡулланыуҙы алама ғәҙәткә тиңләүсе һәм ошо рәүешле хаталаныусы кешеләрҙең уйҙырмаһы. Был уйҙырма ике яҡлы уйлап сығарылған, йәғни уның "йәшәүен" иҫерткес эсемлектәрҙе етештереүсе һәм уны ҡулланыусы тәьмин итә. Етештереүсегә был уйҙырма "йәшел йылан"ды аҙыҡ-түлек менән бергә һатырға мөмкинлек бирһә, эсеүсегә иһә үҙен бөтөнләй бөткән алкоголиктар рәтенә индермәҫкә булышлыҡ итә. Кешенең "Йылына бер тапҡыр эсеүем бер ниндәй хилафлыҡ килтермәйәсәк", "Байрамдарҙа эсергә була", тиеүҙәре нәҡ ошо сығарылыштан. Ләкин былай тип уйлау тулы мәғәнәһеҙлек, сөнки йылына бер тапҡыр эсһәң дә, көн һайын ауыҙыңа ҡойһаң да - һин алкоголь ҡулланыусы, йәғни эскесе. Ошо хәҡиҡәтте күптәр ҡабул итмәй һәм яңылыша.

**Элина:** Күптәр үҙенең иҫерткес эсемлек ҡулланыуын дөйөм төркөмдән айырылмаҫҡа тырышыу, тип аңлата. Ләкин бына нимәһе ҡыҙыҡ: башҡа бөтә өлкәлә кеше айырылып торорға, йәғни индивидуум булырға ынтыла, үҙенең "һоро масса" түгел икәнлеген иҫбатларға тырыша, ә эш алкоголгә килеп терәлһә, ул шым ғына эсеүселәр рәтенә баҫа һәм нисек булһа ла башҡаларҙан айырылып тормауҙы, күҙгә бәрелмәүҙе артығыраҡ күрә. Был бит үҙ-үҙеңә, үҙеңдең булмышыңа ҡаршы килеү. Эсеү кешенең шәхсәнлеген юҡ итә, көтөүгә әйләндерә.

**▸ Һеҙҙең үҙегеҙҙә алкоголгә ҡарата кире ҡараш нисек тыуҙы?**

**Элина:** 9-сы класта алкоголдең зарары тураһында доклад яҙған саҡта уның ниндәй ҡот осҡос эҙемтәләргә килтереүе хаҡында уҡып белдем. Был мәғлүмәттәр минең өсөн ҙур шаңҡыу булды. Эргә-тирәләге һәр кем иҫерткес эсемлек ҡулланған һәм быны ғәҙәти хәл булараҡ ҡабул иткән ваҡытта алкоголдең насар йоғонтоһо хаҡында белеүем миңә ныҡ тәьҫир итте. Унан һуң, кунц-камералағы алкоголь ҡулланыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡот осҡос ғәриплекте күреүем иҫерткес эсемлектәргә булған кире ҡарашымды нығытты ғына.

**Руслан:** Мин иһә, ҡыҙғаныска күрә, бөтөнләй алкоголь ҡулланманым, тип ауыҙ тултырып әйтә алмайым. Студент йылдарында иҫерткес эсемлектәр ҙә эстем, тәмәкеһен дә борҡоттом. Ләкин, ни өсөндөр, шул ваҡытта уҡ әле "Кәләш алырға йыйынһам - тартыуымды, ә кәләш алғас - эсеүемде ташлайым", тип әйтә торғайным. Ысынлап та, был һүҙҙәремде тормошҡа ашырҙым һәм бөгөнгө көндә шешәгә лә, тәмәкегә лә битарафмын. Шулай уҡ минең был ҡарарыма тирә-яҡтағылар көслө тәьҫир итте. Ҡайһы бер балалыҡ дуҫтарым, күршеләр, таныштар нәҡ эсеү арҡаһында ҡаты ауырыуға һабышты, ә кемеһеләр иһә бөтөнләй яҡты донъя менән хушлашты. Мин ҡәтғи рәүештә уларҙың хатаһын ҡабатламаҫҡа хәл иттем. Был юлды һайлауым минең өсөн оло файҙа булды, сөнки хәҙер үҙем, ғаиләм, яҡындарым өсөн ваҡытым да күберәк, матди йәһәттән дә күпте оттом.

**▸ Ә алкоголь ҡулланған дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ бармы? Әллә ундайҙар менән бөтөнләй аралашмайһығыҙмы?**

**Руслан:** Аралашабыҙ, әлбиттә. Ләкин һәр ваҡыт үҙебеҙҙең кире ҡарашыбыҙҙы белдерә йөрөйбөҙ. Ҙур шау-шыу ҡуптармайынса, оло һүҙгә килешмәйенсә, һәр береһенә уның зарары хаҡында һөйләйбеҙ, ошо темаға төрлө бәхәстәр ойоштораబыҙ. Үҙебеҙҙең өлгөлә эсмәйенсә лә күңелле ял итергә мөмкин икәнлеген күрһәтәбеҙ. Был, ысынлап та, шулай. Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ, бәләкәй саҡтағы төрлө байрамдар спиртлы эсемлектәр ҡулланмайынса ла ниндәй күңелле уҙа ине! Ә ҙурайғас, ни өсөндөр, күңел күтәреү өсөн мотлаҡ спиртлы эсемлектәргә ынтыла кеше һәм, дөрөҫөн әйткәндә, байрамының йәмен ебәрә, бәҫен төшөрә. Алкоголһеҙ байрам - ул аҡыл байрамы. Шуны аңлау мөһим йәмғиәткә.

**Элина:** Алкоголдән, тәү сиратта, балаларҙы һаҡлау һәм яҡлау мөһим. Ә бының өсөн үҙеңә был йәһәттән көслө булыу, йәғни иҫерткес эсемлектәрҙән алыҫ тороу кәрәк. Бәләкәй бала тәрбиәләнгән ғаиләләрҙә, ғөмүмән, алкоголгә урын булмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ балалар менән был темаға тәрбиәүи әңгәмәләр уҙғарыу, алкоголдең зарары хаҡында аңлатыу, бындай афәттән алыҫ тороусыларҙы миҫалға килтереү ыңғай һөҙөмтәләргә килтерәсәгенә шигем юҡ. Бала бындай насар юлға баҫмаһын өсөн уның буш ваҡытын файҙалы һәм кәрәкле шөғөлдәр менән тултырыу фарыз. Мәҫәлән, уҡыуға көс төшөрөргә, төрлө түңәрәктәргә йөрөтөргә, ғаилә менән урманға ял итергә сығырға, шулай уҡ төрлө мәҙәни һәм спорт сараларына йөрөргә мөмкин. Һәм, иң мөһиме, эшкә һөйөү тәрбиәләү, сөнки хеҙмәт терапияһы - кешелеккә тәбиғәт тара-



***Тәү сиратта, кеше үҙенә үҙе ярҙам итергә тырышырға, был һаҙлыҡтан сығырға ынтылырға тейеш. Үҙенең ауыр хәлдә икәнлеген танымаған һәм һуҙылған ярҙам ҡулынан баш тартҡан кеше менән эш итеүе ауыр. Быны эскән кеше менән көрәшеп ҡараған һәр кем яҡшы аңлай. Ләкин кеше булып яратылған һәм донъяға аңлы булып килгән әҙәм эсеүенең үҙе өсөн генә түгел, ә яҡындарына ла оло ҡайғы икәнлеген яҡшы аңлайҙыр, тип уйлайым. Шуға күрә ышанысты юғалтмаҫҡа һәм айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк. Был йәһәттән республикала уҙғарылған "Айыҡ ауыл" конкурсының әһәмиәтен билдәләп үтмәйенсә булмай. Сәләмәт һәм айыҡ тормош алып барыуҙы пропагандалау, ошондай кешеләрҙе һәм ауылдарҙы бар халыҡҡа күрһәтеү күптән кәрәк ине. Конкурс үҙенең изге ниәтенә, һис шикһеҙ, өлгәшәсәк. Быға ышанырға кәрәк.***

фынан бүләк ителгән иң көслө һәм ыңғай тәьҫир итеүсе көс.

**"Башҡа эсмәйем", тип тә һүҙендә тормаған кешегә ҡарата нисек ышанысты юғалтмаҫҡа? Уға ҡайта-ҡайта ярҙам итергә тырышырға кәрәкме, әллә ҡул һелтәргәме?**

**Элина:** Ниндәйҙер ҡаты ауырыуға тарыған яҡын кешегә ҡул һелтәп ҡуйыу ҡырағайлыҡ, тип ҡабул ителә, ә эскелек - ул психологик ауырыу, шуға күрә быйдай кешене лә ситкә этәргә ярамай, минеңсә. Эскән кеше был бәләһенән ҡотолорға теләп тә, яҡындарының ярҙамын, аңлауын, терәк-таяныслы тоймай икән, уны йырып сыға алмаясаҡ, тип уйлайым. Әлбиттә, ҡат-ҡат һүҙ биреп тә, һүҙендә тормаған һәм эсеүе менән яҡындарына ҡайғы-ғазап килтергән кешегә ышаныу һәм уға терәк булырға тырышыу ауыр, ләкин был һынауҙы еңеп сығыр өсөн барыһына бер түптән булып эш итеү мөһимдер. Бында шулай уҡ айырым ғаиләнең тырышлығын йәмғиәт тә күтәреп алһа, уңыштар бейегерәк тә, әһәмиәтлерәк тә буласаҡ. Мәҫәлән, спиртлы эсемлектәрҙе һатыу магазиндарының халыҡ йәшәгән урындарҙан ситтә, йәғни ауыл, ҡала ситтәрендә булыуы ла үҙенең файҙаһын бирер ине.

**Руслан:** Тәү сиратта, кеше үҙенә үҙе ярҙам итергә тырышырға, был һаҙлыҡтан сығырға ынтылырға тейеш. Үҙенең ауыр хәлдә икәнлеген танымаған һәм һуҙылған ярҙам ҡулынан баш тартҡан кеше менән эш итеүе ауыр. Быны эскән кеше менән көрәшеп ҡараған һәр кем яҡшы аңлай. Ләкин кеше булып яратылған һәм донъяға аңлы булып килгән әҙәм эсеүенең үҙе өсөн генә түгел, ә яҡындарына ла оло ҡайғы икәнлеген яҡшы аңлайҙыр, тип уйлайым. Шуға күрә ышанысты юғалтмаҫҡа һәм айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк. Был йәһәттән республикала уҙғарылған "Айыҡ ауыл" конкурсының әһәмиәтен билдәләп үтмәйенсә булмай. Сәләмәт һәм айыҡ тормош алып барыуҙы пропагандалау, ошондай кешеләрҙе һәм ауылдарҙы бар халыҡҡа күрһәтеү күптән кәрәк ине. Конкурс үҙенең изге ниәтенә, һис шикһеҙ, өлгәшәсәк. Быға ышанырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алкоголь - тотош халыҡты, илде юҡ итеүгә йүнәлдерелгән иң көслө ҡоралдарҙың береһе. Быны шулай икәнлеген Америка индейҙары миҫалында асыҡ күрергә була. Ваҡытында айыҡ аҡыллы ирекле халыҡты мылтыҡ ярҙамында баҫып ала алмағас, улар алкоголь эсереп баш эйҙергәндәр. Бөгөнгө көндә бик аҙ һанлы индейҙарҙы музейҙа һаҡланған ҡомартҡылар рәтенә индерергә була. Улар хәленә төшмәйек тиһәк, бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ ғаиләһе өлгөһөндә йәшәүселәрҙең күберәк булыуы мөһим. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

# АҪАБА ХАЛЫҠТЫ ИХТИРАМ ИТ...

## телен дә аңлай бел!



Линдси һәм Крейг.

**Уларҙы тыңлап ултырһаң, тап кинолағы кеүек романтик мөхәббәт шаһиты булаһың. Әммә практикаға ғына тип килгән американлы Крейг менән Линдсиҙың мөхәббәте тап беҙҙең Башҡортостан ерендә, йәмле Ҡариҙел районында башлана. Ғаилә ҡороп, Өфөлә төпләнергә теләүҙәренең бер сәбәбе, бәлки, тап ошондалыр.**

### Башҡортостанда тын алыуы ла иркен!

Улар Мәскәүҙә таныша. Әммә ул мәлдә бер-береһенә булған хис-тойғоно тулыһынса аңлап етмәйҙәр әле. Өфөлә Америка-Башҡорт интерколледжы үткәргән лагерға ебәрелгән ҡыҙ менән егет яңынан күрешә. Һөйләшеп-аралаша башлайҙар. Бер ялда Ҡариҙел буйына ял итергә бара йәш уҡытыусылар. Шунда егет ҡыҙҙы кәмәлә йөрөргә саҡыра. Икеле-микеле йөрөгән һылыуҡайҙың күңеленә йылы йүгерә. Бәлки, юҡҡа ғына түгелдер был саҡырыу? "Ярай, ә нисәлә?" тип һорай һала. "Иртәнге етелә..." ти егет. Әлбиттә, бик иртә торғоһо килмәй ҡыҙҙың, әммә үҙенә күрә романтика бит был! Шунда егет ҡыҙға һөйөүен белдерә.

Шулай итеп, дүртенсе йыл китте уларҙың Башҡортостанда йәшәүҙәренә. Беҙҙекеләрҙе инглиз теленә генә өйрәтеп ҡалмай улар, үҙҙәре лә башҡорт телен рәхәтләнеп өйрәнә. "Беҙҙең хәҙер был тәңгәлдә иң ҡурҡыныс ваҡыт, - тип көлә Линдси. - Кешеләрҙең һөйләшкәнен тыңлап, барыһын да аңлайһың кеүек, әммә һүҙ ҡайһы ваҡыт бөтөнләй икенсе нәмә тураһында барған булып сыға! Сөнки һүҙҙәрҙән дә бигерәк ялғауҙарҙың күплеге башты бутап ҡуя. Шунан аңғармаҫтан уңайһыҙ хәлгә лә ҡалаһың".

Линдси үҙе дала яғынан - Канзас, ә Крейг тау-урманлы Оригона штатынан. Беҙҙең Белорет, Бөрйән районы тәбиғәтен үҙҙәренекенә оҡшата Крейг. "Океан ғына юҡ, - тип шаярта. - Беҙ тәбиғәт ҡосағында үҫтек, шуға күрә Мәскәүҙә һауа етмәгәндәй тойола ине. Тыныс, кеше йөрөмәгән йылға-күл буйына барам тиһәң, ҡаланы сығыуға ғына әллә күпме ваҡыт үтеп китә, - ти улар. - Ә бында тәбиғәткә сығам тип йыраҡ китергә лә кәрәкмәй". Пигейҙарға шулай уҡ Башҡортостандың тыныс, ығы-зығынан азат булыуы, кешеләрҙең киң күңеллелеге, ябайлығы оҡшай. Ҡариҙелдән тыш, Яҡтыгүлдә, Инйәр буйында ял итергә өлгөргәндәр, Абҙаҡҡа ла барып ҡайтҡандар. Баймаҡ, Хәйбулла райондарында ҡунаҡта булғандар. Был ерҙәр уларҙың яратҡан урындарына әүерелгән.

"Башҡорт дәүләт академия драма һәм Милли йәштәр театрҙарына рәхәтләнеп йөрөйбөҙ. Фәйзи Ғәскәров исемендәге академия дәүләт бейеүҙәре ансамбленең, ҡурайсылар концерттарын ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлаша Линдси. - Ғөмүмән, бында халыҡ йыр-бейеүгә ғашиҡ. Ҡунаҡтарҙа гармун моңона ҡушылып күмәкләшеп йырлашып ултырыуҙар, тыпыр-тыпыр килеп бейеүҙәр - үҙе ни тора! Хатта бәләкәй генә балаларҙың да йырлап-бейей белеүҙәре һоҡландыра. Америка был йәһәттән артта ҡалған, бик үкенес... Әммә мин башҡортса тыпырлатырға өйрәнә башланым инде. Бик өйрәнгем килә". Тел һынлы телде өйрәнгәс, быныһын ғына булдырырына шигем юҡ, теләге генә һүрелмәһен.

### Тел белеү эшебеҙҙә ярҙам итә

Башта, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында Америка-Башҡорт интерколледжы үткәргән инглиз теле лагерына килеп, сит телдә һөйләшеп йөрөгән балалар араһына барып эләккәс, тәүҙә аптырап ҡалалар. Рәсәйгә килгәне бирле улар рус телен генә ишетергә күнеккән була. Шунда уҡ башҡорт телен өйрәнеү теләге тыуған уларҙа. Колледжға уҡытырға килгәс инде, мотлаҡ уҡырға ҡарар иткәндәр. "Тел аралашыр өсөн бирелгән, - тигән фекерҙә Пигейҙар. - Әлбиттә, Башҡортостан ерендә башҡорт телен белеү мөһим дә түгел кеүек, сөнки бәләкәсенән өлкәнгә тиклем русса һөйләшеп йөрөй. Әммә ошо ерҙең төп халҡының телен ихтирам итәһең икән, барыбер ниндәйҙер кимәлдә был телде белеү ҙә кәрәк. Һанай китһәң, тел өйрәнеүҙең яҡшы яҡтары бик күп инде ул. Әйтәйек, һинең телең байый, ҡарашың киңәйә, дуҫтарың арта, мәҙәниәтте ныҡыраҡ аңлай башлайһың. Эргәңдә сит телдә һөйләшә башлаһалар, ауыҙ асып аптырап ултырмайһың, һүҙҙең ни тураһында барғанлығын шунда уҡ аңлап алаһың, уларға ҡушылып һөйләшәһең. Унан, үҙебеҙ сит тел уҡытҡас, тел өйрәнеү эшебеҙҙә бик тә ярҙам итә".

Пигейҙарҙың килеүе американдарҙың Рәсәй менән ҡыҙыҡһынған осорона тура килә. Уларҙы ла "сит илдә ниҙәр бар, ундағы кешеләр ниндәй" тигән ҡыҙыҡһыныу алып сығып китә. "Рәсәй беҙҙең өсөн ғүмер буйы йомаҡ булды. Һәм беҙҙең арала ниндәйҙер кәртә торҙо. Юл асылғас, күпләп был яҡҡа килә башланылар", - тип хәтерләй әңгәмәселәрем. Олораҡтар иҫләйҙер, беҙҙә лә шундай уҡ хәл күҙәтелде бит. "Америкала эшһеҙлек көслө, бер телем икмәк бер һум тора", тип һөйләгәндәрендә "бахырҙарҙы" йәлләп күҙҙән хатта йәштәр килеп сыға торғайны. Ул ваҡытта беҙҙә ашханаларҙа икмәкте өҫтәлгә тәрилкә менән өймәләм итеп бушлай ултырталар ине...

### Тормош ығы-зығыһын ситкә ҡуйып...

Линдси: "Мин Рәсәйгә өс-дүрт айға ғына тип килгәйнем. Ятаҡҡа рус ҡыҙҙары менән урынлаштырҙылар. Бер нәмә лә аңламайым, бөтөн нәмә ят... Шул мәлдәрҙә ныҡ итеп аралашыуға сарсаным. Үҙем һөйләшергә яратам, шуға күрә минең өсөн ошонан да ауырыраҡ нәмә юҡ ине. Өс айҙа саҡ күнегә генә башланым, таныштарым барлыҡҡа килде. Тел өйрәнеү өсөн, әлбиттә, был ғына ваҡыт етмәй, ҡалырға булдым..."

"Рәсәйгә килгәс, кешеләрҙең ҡунаҡсыллығы аптыратҡайны. Ҡайҙа ҡунаҡҡа саҡырһалар ҙа, ыуылдырыҡ ҡуялар. Ә беҙгә ул бик оҡшамай, шулай ҙа, хөрмәт йөҙөнән, сытаймаҫҡа тырышып ҡаба торғайныҡ. Ҡайһы берҙә тиҙерәк ыуылдырыҡтан ҡотолорға ла, икенсе берәй нәмәне тәмләргә, тип, йәһәт-йәһәт кенә ашайһың, ә улар, һинә оҡшаны, тип уйлап, ҡыуана-ҡыуана тағы һала... Ә Башҡортостанда халыҡ тағы ла ҡунаҡсылыраҡ булып сыҡты. Ашамлыҡтан өҫтәл һығылып тора, Аллаға шөкөр, бында инде ыуылдырыҡ тәҡдим итмәйҙәр, аҙыҡтарҙан иң оҡшағаны талҡан булды", - тип әңгәмәгә ҡушыла Крейг.

Линдсиға һөйләшә-һөйләшә сәй эсеү оҡшай икән. "Туғандар, дуҫтар йыйылышып, аралашып, күңелдәре булғансы һөйләшеп ултыра алалар. Минеңсә, тормош ығы-зығыһын ситкә ҡуйып тороп, бер-береңә ваҡыт бүлә алыу бик һәйбәт сифат", - ти ул.

Ә Крейг беҙҙәге мунсаға иҫе китә: "Сабынып тороп мунса инеү оҡшай. Америкала кеше ошо ләззәттән мәхрүм. Беҙҙең өйҙә алдан фиңдар йәшәгән. Уларҙың саунаһы бар ине, ләкин беҙ уны нисек ҡулланырға белмәнек, шуға күрә ул келәт хеҙмәтен үтәне. Бер рус ғаиләһе күсеп килгәс, мунса ултыртҡан ултыртыуын, ләкин, исмаһам, бер тапҡыр йыуынырға ла өлгөрә алмай ҡалғандар. Күршеләре төтөн күреп, янғын сыҡҡан, тип янғын машинаһын саҡырта. Беҙҙә ниҙер тәҙөйөм тиһәң, еңел генә түгел, рөхсәт алыуы бик ҡыйын".

Пигейҙарға Башҡортостн халҡының алсаҡлығы, ихласлығы, таныш булмаған кешеләрҙең дә бер-береһе менән һаулыҡ һорашып уҙыуы, шулай уҡ сабыр, түҙемле булыуҙары оҡшай. "Беҙҙә әҙ генә ҡыйынлыҡ килеп тыуһа ла көйә башлайҙар", - тиҙәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо ике Америка кешеһенә ҡарайһың да, хайран ҡалаһың: ни тиклем йәшәүгә дәрт, киң күңеллелек бөркөлөп тора уларҙан. Һәр көндән йәм табып, тәбиғәт ҡырыҫлығына ла, кешеләрҙең ҡатылығына ла, йыш булып торған тәртипһеҙлектәргә лә зарланмай, иртәгәһе көндөң тағы ла матурыраҡ булырына ышанып, йылмайып-көлөп йәшәй беләләр. Сит ил граждандары беҙҙең халыҡты ихтирам итеп торғанда, үҙебеҙ ҙә бер-беребеҙгә булған мөнәсәбәтте ҡабат-ҡабат күҙҙән үткәреп, яҡшыға ынтылып йәшәһәк ине...**

**Гөлнара МОСТАФИНА.**

***✓ Нишләнең һин, апай? Нидәй көнгә төшөрҙөң? Бындай хурлыҡҡа ҡалғансы, астан ятып үлһәләр, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Нисек кенә тырышып уҡыһа ла, яҙмышына ҡара йоҡҡан кеше ул хәҙер.***




Һыуыҡ. Ләкин нисек тә сыҙарға кәрәк. Түҙмәй хәл дә юҡ. Мейестәге ҡуҙҙы ошоға тиклем һүндермәй киләләр ине. Ә бөгөн тороуға бер нәмә лә ҡалмаған. Бына апаһы эштән ҡайтыр ҙа, күршеләрҙән ҡуҙһалғысҡа һалып, тере күмер алып инер. Унан ут тоҡандырырҙар. Йүнле утыны ла юҡ бит әле уның... Апаһы алып ҡайтырға вәғәҙә биргәйне. Сәрбиямал үҙе сығып, ҡоро-һары эҙләр ине лә, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, ҡатаһының табаны төштө. Уны тектерергә кәрәк. Ҡыҙ бала иҫке юрғанға аяғын төрҙө. Һыйыр мөңрәгәне ишетелде. Асыҡҡандыр шул. Уның да ашарына әҙ генә ҡалды. Алаҡай оҙаҡламай быҙауларға тейеш. Аҡ буласаҡ, телгә аҡ йоғасаҡ! Күп ҡалманы. Бөгөн, йә иртәгә. Бына шулай үҙен йыуата Сәрбиямал. Ҡатаһының табаны төшкәндән бирле ул мәктәпкә лә йөрөй алмай... Бер үҙе өйҙә ҡаңғыра. Ә кистәрен Сәрбиназ апаһының ҡосағында йылына. Апаһы тыйһа ла, яланаяҡ көйөнсә һыйырҙы сығып ҡарай. Сәрбиназ ҡара таңдан эшкә китә. Быуаҙ һыйырға күҙ һалмайынса ла ярамай, юғиһә, безәүкәйен туңдырып ҡуйырҙар. Эйе, Сәрбиямал Алаҡайға тиҙ-тиҙ генә һалам ташлай ҙа, өй яғына "зыйлай". Аяғын итәгенә йәшереп, бөгәрләнеп кенә ултыра. Ҡай саҡ йүгереп тә, бейеп тә ала. Шулай күңеллерәк. Икенсе көн инде ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапҡаны юҡ. Түҙмәй ҡайҙа бараһың? Әсәләре ауырып ярты йыл элек үлеп ҡалды. Аталарының һуғышта хәбәрһеҙ юғалыу ҡайғыһы уны шулай бөтөрҙө шикелле. Һәр хәлдә, Сәрбиназ апаһы шулай ти. Сәрбиназ ҙур, уға ун биш йәш тулды. Сәрбиямал апаһынан биш йәшкә кесе. Апаһы менән бер ҡор булмауына, диләнкә ҡырҡырға бергә йөрөй алмауына ҡайғыра. Ярар, уның өҫтөндә һыйыр ҡарау бурысы бар бит әле.

Бөтөнләй ҡараңғы төштө, ә Сәрбиназ апаһы һаман ҡайтманы. Туҡта, ана бит ҡар шығырлай! Бөршәйгән ҡыҙ яҙылып ултырҙы. Өйгә бригадир булып йөрөгән Шәрип ҡарт килеп инде.

- Апайыңды көтмә. Алып киттеләр.

- Ҡайҙа алып киттеләр?

- Иген урлап тотолдо. Йүнһеҙ, - тип һөйләнде бригадир. - Башы икәү булғас...

Сәрбиямал күҙен шар асҡан килеш, әкрен генә тороп баҫты.

- Алйот ҡыҙ! Нимә уйлаған. Белә ине бит... белә ине бит ҡалай буласағын! Бәлә булдылар башҡа! Бына ҡалай була ул ҡаза! - тине бригадир.

Ҡот осорҡос хәбәр ҡыҙыҡайҙың аңына барып етте, күкрәгенән иңрәп бер ауаз сыҡты.

- Мин әйтермен күршеләреңә. Күҙ-ҡолаҡ булырҙар йорт-ҡураңа. Унан бер нәмә хәл итербеҙ, - тине үҙенсә йыуатып Шәрип ҡарт.

Апаһының бүтән бында ҡайтмаясағын аңлаған Сәрбиямал ҡысҡырып илап ебәрҙе.

Тышта һыйыр мөңрәне. Эйе, һыйыр ас, ашарға һорай. Ә уның бийма түгел, ҡатаһы ла юҡ. Апаһы өйҙә саҡта уныҡын алмашлап кейәләр ине... Ләкин ҡалайтып булһа ла һыйырға сығырға кәрәк. Ул бөгөнлө-иртәле быҙаулаясаҡ!

Күршеләргә инәһе урынға, ҡыҙыҡай кәртәгә йүнәлде. Һыйыр, һыйыр... Алаҡай, хәҙер-хәҙер! Туң һалам соҡоуы анһат түгел. Аяҡ ҡатты. Иҫ белмәҫ булды. Өйгә йүгереп килеп инде лә алама юрған аҫтына сумды. Нимә менән генә барып бөтөр был эш? Апаһын ҡайтармаҫтармы икән ни? Ул саҡта нимә эшләр яңғыҙы? Юрғанға бөркәнгән көйөнсә иланы ла иланы. Һәр ҡыштырлаған тауышҡа һиҫкәнеп, башын ҡалҡытты. Йоҡламай көтһә, апаһы ҡайтып инер һымаҡ. Ләкин ул ҡайтманы. Сәрбиямал иртәнге һыуыҡтан өшөп уянды. Урындан торғо килмәй. Һыйырҙары ни хәлдә икән? Мөңрәмәй былай. Шул саҡ ишек шығырлап асылды. Сәрбиямал ялп итеп тороп ултырҙы. Апаһы! Хәҙер муйынына осоп аҫылынасаҡ, тик туфалтаны ашатлаусы апаһы түгел, ә арғы ос Ләйсән апай ине. Ҡыҙҙың янған күҙҙәре ҡабат һүнде. Асҡан ауыҙын ябырға ла онотоп, саҡырылмаған ҡунаҡҡа төбәлде. Бынан бер нисә көн элек кенә ошо апай килеп киткәйне.

Эйе, ошо апай бит уларҙың һыйырын ризыҡҡа алмаштырырға иткәйне. Сәрбиназ ризалашманы. Хәҙер хужабикәнең юҡлығынан файҙаланып, һәүкәштәрен алып сығып китһә, Сәрбиямал нимә эшләр инде?

- Апайыңдың сәләмен алып килдем. - Аҫтан һөҙөп ҡараған ҡыҙыҡай бер нәмә тип тә өндәшмәне.

- Үҙем ҡайтҡансы һылыуымды ҡарап тор, апай, тип инәлә.

- Юҡ! - тине Сәрбиямал - Апайымдың ҡайтҡанын ошонда ғына көтәм.

- Һы... Ҡара! Ышанмай! Шулай булыр тип уйланым да. Бына, әләйһә, мисәте! - Ләйсән апай кеҫәһенән Сәрбиназдың көмөш балдағын сығарҙы. Эйе, әсәһе үлгәс, апаһы әсәһенең балдағын һалмай таға ине. - Мә, миңә уның кәрәге юҡ. Апайың туғанын алып ҡайтыр кеше табылғанға шат, белгең килһә! Донъя етем-еһер менән тулы. Кеше үҙ балаһын туйҙыра алмай. Кемгә кәрәк артыҡ тамаҡ? Һыйыр хаҡына ризалаштым.

Сәрбиямал балдаҡты усына ҡыҫҡан килеш һаман бер нәмә лә әйтмәне.

- Апайың урлашып, күрә-ҡара башын утҡа тыҡты. Бер ус бойҙайға алданып! Хәҙер төрмәнән ҡотолоу юҡ. Мин Рәйеф ағайың арҡаһында ғына уның менән һөйләшә алдым.

Эйе, Ләйсән апай колхоз рәйесе Рәйефтең бер туған һеңлеһе.

- Һыйырың...

- Апайым менән икебеҙҙеке!

- Хәҙер нәмәләрегеҙҙе канфискәвәт итеп ҡуйһалар, кем килеп яҡлар? Икебеҙҙеке, имеш...

Һыйырҙарын алып китерҙәреме икән ни? Сәрбиямал мышҡылдай башланы.

- Тор, йыйын, балам, - тине был юлы Ләйсән. "Балам" тигән һүҙ күңелгә тәьҫир итте.

- Башта һыйырҙы ҡарап инәм.

Бер аҙҙан ул атылып килеп инде.

- Быҙаулаған!

- Э-э-э... Бәрәкәтле бала икәнһең! Өйөгөҙгә индереп торайыҡ. Безәүкәйе туңып ҡуймаһын. Иртәгәләре килеп алып китербеҙ. Бөгөн булмаҫ.

- Апайымсы? Ул бит белмәй.

- Ай, Алла! Апайым да, апайым. Ҡайтарһалар, килер ҙә алыр!

Мына, аяғыңа. Апайың әйтте, ул яланаҡ тип.

Сәрбиямал йәһәт кенә төпләнгән быйманы ҡуңалтаҡ кейеп алды, унан үҙенең иҫке бишмәтенә үрелде. Ләйсән апайҙарҙың йылы өйөндә ҡайнар сәй эскәс, тәнде лә, йәнде лә рәхәтлек биләп алды. Быҙау шатлығы енде, ул ойоп киткәнен дә һиҙмәне.

Сәрбиназ апаһы бергә эшләгән Рәүфә тигән дуҫы менән бергә тотолған. Ҡайтып барған саҡтарында арттарынан ҡыуып етеп, моҡсайҙарын тикшергәндәр. Ана шунда килеп сыҡҡан да инде урлап алып ҡайтып барған нәмәләре. Сит малға ҡул һуҙыу түгел, берәүгә лә үҙ ғүмерендә ауыр һүҙ әйтмәгән йомшаҡ күңелле апаһының был ҡылығын кисереүе ныҡ ауыр булды Сәрбиямалға. Сәрбиназ уның өсөн атай ҙа, әсәй ҙә ине бит. "Мине аслыҡҡа интектермәҫ өсөн алғандыр инде. Тағы ла бер көн сыҙаһа, быҙауыбыҙҙы күргән булыр ине. Их-ма, ҡалай үкенес..." тип уйланып, ут йотҡан саҡтары әҙ булманы Сәрбиямалдың. Бына шулай биш йылға китеп барҙы апаһы, хәбәр-хәтер ишетелмәне.

Баштараҡ донъялағы иң яҡын, иң ғәзиз, иң ҡәҙерле кешеһен һағынып йыш ҡына илай торғайны. Ләкин мәктәпкә йөрөй башлағас, мәшәҡәттәр ҙә күбәйҙе, алдынғы уҡыусы Сәрбиямал бөтөн сараларҙа ҡатнашты, зирәк баланы унда ла, бында ла ҡуштылар, "активисыбыҙ" тип йөрөттөләр. Һәр хәлдә, күңелде күтәрер нәмәләр табылып торҙо. Яҡшы уҡыған, тырыш ҡыҙ баланың хәлен мәктәптә лә аңлағандарҙыр. Иптәштәре араһында ла уға ҡырын ҡарағандары, ҡыйыш һүҙ әйтеп рәнйеткәндәре булманы. Апаһының ҡылығы өсөн оялыу, кәмһенеү хисе кәмегәндәй булды. Хәленән килгәнсә, ул үҙенең исемен, фамилияһын аҡларға тырышты.

Ике йылдан Еңеү таңы атты. Бүтәндәр һымаҡ уҡ оло шатлыҡ кисерҙе Сәрбиямал. Эйе, 9 май иң оло байрам булып ҡалды хәтерендә. Мәктәптә ҙур сараға әҙерлек башланды. Улар концерт ҡуйырға тейештәр, хатта номерҙарҙы район үҙәгенә алып барасаҡтар икән. Күрше райондарға ла сығасаҡтары мәғлүм булды. Яҡшы хәтерле, тасуири шиғыр уҡырға ятаҡан Сәрбиямалды алып барыусы итеп ҡуйҙылар. Ҡыҙыҡайға үҙе яҙған бер нисә шиғырын ятларға ҡуштылар. Оҙонорағын хатта сценарий итеп эшләнеләр, йәғни бер нисә бала уны бүлеп һөйләйәсәк. Аҙаҡҡы репетицияға мәктәп директоры менән ҡуша бер ят апай ҙа инеп ултырҙы. Район үҙәгенән вәкил, тинеләр. Балалар таралышҡас, Сәрбиямал ашыҡмай ғына кейенде, уҡытыусыһы менән бер-ике номер буйынса һөйләшеп алырға кәрәк ине. Ә ул, нишләптер, директор янында оҙаҡланы. Уны ишек төбөндә көтмәк булып, ҡыҙ шул яҡҡа атланы. Ишек ябылып бөтмәгәйне. Һөйләшеү ап-асыҡ ишетелә. Сәрбиямал ҡолаҡ һалды.

- Әйттем бит, юҡ, тинем! - райондан килгән ҡатындың тауышы асыулы. - Башығыҙ эшләйме һеҙҙең, юҡмы? Рәғиҙә һеңлем, беҙ Еңеү көнө билдәләйбеҙ. Үҙгәрт! Теге актив ҡыҙыҡайҙың апаһы бур, төрмәлә ултыра. Тимәк, дошман. Беҙ һәр ялыуға ҡолаҡ һалырға тейешбеҙ. Ә беҙҙә фронтовиктарҙың балалары былай ҙа етерлек!

Рәғиҙә апай нимәлер тип яуап бирҙе, тик ишетелмәне. Тик уның яуабынан ят апай ҡыҙыбыраҡ китте.

- Фронтовик булһа ни, әле уның ҡайҙалығы асыҡланмаған. Хәбәрһеҙ юғалған, ишеттеңме? Хәбәрһеҙ! Сәйәси уяулыҡты юғалтмайыҡ, иптәштәр. Башыбыҙҙан һыйпамаҫтар. Был концертҡа активисығыҙҙы яҡын юлатмағыҙ.

Сәрбиямал аяҡтарын саҡ һөйрәп сығып китте. Ҡайтҡас, ҡалтыранып ауырый башланы. Иртәгәһен мәктәпкә аяҡ тартманы. Ауырып киткәнен иптәштәре аша хәбәр иттерҙе. Үҙе ойоштorған, үҙе төҙөшкән байрам концертынан баш тартырға мәжбүр булды... Үкереп иланы.

Апаһы тураһында бик оҙаҡ уйланып йөрөнө. Нишләнең һин, апай? Нидәй көнгә төшөрҙөң? Бындай хурлыҡҡа ҡалғансы, астан ятып үлһәләр, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Нисек кенә тырышып уҡыһа ла, яҙмышына ҡара йоҡҡан кеше ул хәҙер. "Беҙ халыҡ дошмандарына, ҡороҡҡостарға, бурҙарға ҡарата аяуһыҙ булырбыҙ. Бурҙар, халыҡ милкенә ҡул һуҙыусылар һатлыҡ йәндәрҙән ҡайһы яғы менән айырыла?" Мәктәптә шулай тип һөйләгән саҡтарында, был һүҙҙәрҙе үҙенә төбәлгән һымаҡ тоя ине ул.

Бер йылдан улар Иртәлек ауылына күсеп киттеләр. Ләйсән апаһы күсенергә мәжбүр булды. Ләйсәндең Рәйеф ағаһын - рәхимһеҙ, ҡаты ҡуллы кешене - колхоз рәйеслегенән бушаттылар. Ул эштән алынғас, һеңлеһенең ғаиләһе өсөн дә ауылда ҡалыуҙан әллә ни мәғәнә ҡалманы. Ә Сәрбиямал өсөн күсеп китеү шатлыҡ булды.

- Бында мәктәп тә яңыраҡ икән, яңы дуҫтар ҙа табылыр, - тине.

- Яңы түгел, иҫкеһенә ышаныуы ҡыйын хәҙер. Ана, ағайымды эштән алғастары миңә нисек кенә исем таҡманылар. Ә бит ҡушамат тағыусыларҙың күбеһе ағай хужа саҡта юхаланып, эргәмдә ураланып йөрөнө, өйөмдән сыҡманылар, ҡәһәр төшкөрҙәре. Ә һин апайыңдың төрмәлә ултырғанын әйтә күрмә. Йом ауыҙыңды. Дошман итерҙәр, үҙеңде лә бур яһарҙар. Ишетһен ҡолағың!

Ниндәй дошман? Нимәһен сағыштыра икән был уҫал апай? Аҡ эт бәләһе ҡара эткә, апаһы бер яңғылышты, шуны теленән төшөрмәйсе. Ауылдағы иң һөтлө һәүкәш хәҙер Ләйсән апайҙа. Ҡыуан да йәшә бит. Алаҡай йыл һайын быҙаулап тора.

- Ярар, өйөгөҙҙө алыусы табылды.

- Нишләп улай тиһең, апай?

- Атаҡ, һуң өйөгөҙҙө һатырға тура килде. Һине нисек аҫырарға? Уҡыу аҡса эшләү түгел!

Өйҙәре һатылған? Сәрбиямалдың тыны ҡыҫылды. Ул бөтөнләй берәҙәк икән дә баһа!

- Атай һалған өй ине бит.

- Апайың ғәйепле. Уны сығарһалар, мәйтәм, хәйер һорашып йөрөрһөгөҙмө икән? Ярар, бәхетең, мин бар.

Их, апай, һинең бер хатаң бына нимә эшләтте? Һылыуың да кеше көнлө. Мыжыҡ Ләйсән апайҙың күҙенә генә ҡарап тора. Ҡолаҡ итен күпме сәйнәһә лә, ҡаршы беҙ һүҙ әйтә алмай. Бөтөнөһөнән яҙҙылар! Төрмәнән ҡайтҡандарға мөнәсәбәт яҡшы түгел. Сәрбиназды бер ҡайҙа ла эшкә алмаһалар? Ләйсән апай хәҙер көн-төн шул турала тылҡый. Мин уны аҫырарға йыйынмайым, ти. Ысынлап та, Сәрбиямал ҡурҡа, нишләргә белмәй ине. Апайҙы ла уйламай булмай.. Шул саҡ күңелдә йәлләү менән ҡатыш нәфрәт ҡайнап ҡуя, тиһә лә, арттырыу булмаҫ.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**Донъяның сәскәләргә күмелгән бер мәлендә Өфө ҡалаһының Салауат Юлаев майҙанында быға тиклем бер ҡайҙа ла күҙәтелмәгән үҙенсәлекле сара -Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов шиғырҙарын яттан һөйләү буйынса "Минең Рәми" марафоны һәм "Туған тел" шиғырын күмәкләп һөйләү буйынса флешмоб үтте. Өфө ҡалаһының Киров районы хакимиәте, "Юлдаш" радиоһы, "Ватандаш", "Шоңҡар" журналдары, "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзиттәре тарафынан ойошторолған шиғри марафон бер үк ваҡытта Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе, Сибай, Салауат, Нефтекама, Учалы, Белорет, Бөрө ҡалаларында һәм Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында, Асҡын район үҙәгендә, Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғолда, Баймаҡ ҡалаһында һәм районың Ғүмәр ауылында, Бөрйән районының Мәһәҙей, Әтек, Әбделмәмбәт ауылдарында, Стәрлебаш районының Иҫке Ҡалҡаш, Ҡабыҡкыуыш, Елембәт, Аллағыуат ауылдарында, Дыуан, Әбйәлил районының Ҡырҙас, Йәнгел ауылдарында, Күгәрсен районының Мораҡ һәм Тәүәкән ауылдарында ла үтте. Төрлө ауыл-ҡалаларҙа үткән шиғри марафондар менән интернет селтәрендә http://vk.com/minen_rami_marafon адресында таныша алаһығыҙ. Ә беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, сарала ҡатнашыусы бер нисә кешегә "Кем ул һеҙҙең өсөн Рәми Ғарипов?", "Бөгөнгө сараның иң төп әһәмиәте нимәлә?" тигән һәм башҡа һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек...**



# ДӨРӨҪ ҺҮҘЕҢ...

## һуңламаны, шағир!

**Рәйсә Ҡарабаева, Өфө ҡалаһы, хаҡлы ялдағы хеҙмәт ветераны:** Бөгөнгө сара тураһында ишеткәс, бик шатланып килеп еттем. Иң яратҡан шағирым ижадына арналған шиғыр байрамын ҡалдыра буламмы инде! Рәми Ғарипов ижады менән электән таныш булғанғалыр, уның һәр тыны, һәрауазы күңелгә яҡын. Халҡы, туған теле, иле өсөн йәнен, тәнен биргән бик һирәктәр затынан бит ул үҙе. Рәми һымаҡ шағирҙар юҡ бөгөн. Нимәһе ҡыуаныслы: Рәми Ғарипов ижадына бөгөн йәштәр иғтибар итә, уны күтәрә икән, бындай ижад, һис шикһеҙ, халҡыбыҙҙы ла өр-яңы рухи кимәлгә күтәрәсәк.

**Рауил Бикбаев, Башҡортостандың халыҡ шағиры:** "Рәми Ғарипов беҙҙең өсөн кем ул?" тигән һорауға бер һүҙ менән генә яуап биреп булмай. Минең өсөн ул иң элек - остазым, замандашым, фекерҙәшем һәм аҙаҡ, бер-нисә йыл аралашып йәшәгәндән һуң, ул, ысынлап та, дуҫыма әйләнде. Бөгөн тағы ла шундай һорауҙы ҡуйырға мөмкин: Рәми Ғариповты кем - уның замандаштарымы, әллә яңы быуын күберәк беләме? Был һорауға яуап эҙләгәндә, сәйер килеп сыҡһа ла, һуңғылары Рәми Ғариповты тулыраҡ асты, тулыраҡ белә, тип әйтергә була. Сөнки үҙе тере саҡта уның ижадының бер сиреге генә донъя күргәндер. Ул вафат булғандан һуң ғына беҙ, уның шәкерттәре, ҡәләмдәштәре - Тимер Йосопов, Динис Бүләков, Сафуан Әлибаевтар, уның архивы менән бик ентекле ултырып, баҫылмаған шиғырҙарын алып, һайлап, донъяға сығарҙыҡ, артабан Надя еңгә был эште бик матур итеп атҡарып ҡуйҙы. Бына ошо кешеләр тырышлығы арҡаһында Рәми Ғарипов яңы быуындарға бөтөнләй яңыса асылды. Ә бөгөнгө сараны мин беҙҙең рухи тормошобоҙҙағы бик оло яңылыҡ тип уйлайым.

**Әнисә Һөйәрғолова, Ишембай ҡалаһындағы Республика кадет мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Марафонға Рәми Ғариповтың шиғырҙарын тасуири итеп һөйләй белгән өс кадет егетте алып килдек - әйҙә, билдәле кешеләр, шағирҙар, үҙҙәре һымаҡ шиғриәт һөйөүсе йәштәр менән аралашып ҡайтһындар, тинек. Был сараға килеп, яңылышмағанбыҙ - шиғриәт, рух, сәм, дәрт аңҡып, бөркөлөп торған баш ҡала мөхитенә килеп юлыҡҡан егеттәр сәхнәгә күтәрелеп, әҫәрләнеп, оялыуҙарын, тулҡынланыуҙарын онотоп, шиғыр һөйләнеләр. Рух берләштерә, кеше менән кеше араһындағы һалма сиктәрҙе емерә икән. Үҙем дә бер-нисә шиғыр һөйләнем. Рәми Ғариповтың байтаҡ шиғырҙарын яттан беләм, сөнки уның шиғриәте иҫ киткес - күңелгә май булып яғыла, ауыр саҡтарҙа ярҙамға килә. Миненсә, һүҙ көсөнә илке-һалҡы ҡарамағаны, үҙ эшенә мөкиббән киткән кеше булыуы арҡаһында уның шиғырҙары һәр заман өсөн актуаль, йылдар үтеү менән бәҫе арта ғына бара. "Иң ауыр эш - һүҙ эше", тигән бит шағир үҙе лә. Бөгөнгө көндә лә һүҙ ғали йәнәптәрен ихтирам иткән, уға бик урынлы һәм дөрөҫ мөрәжәғәт иткән кешеләр бар әле, шуныһы күңелде йылыта.

**Азамат Юлдашбаев, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире:** Рәми Ғарипов - минең өсөн дә, ошо майҙанда ҡатнашыусылар һәм ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында килә алмаған башҡалар өсөн дә, шулай уҡ Башҡортостан, Рәсәй киңлектәрендә ошо шиғри марафонға ҡушылыусыларҙың барыһы өсөн дә - халҡының данлыҡлы улы, арҙаҡлы шәхес һәм башҡорт әҙәбиәтенең алтын бағанаһын тәшкил итеүсе бөйөк шағирҙарыбыҙҙың береһе ул. "Илем", "халҡым", "телем" тип янған, үҙенең бөтөн булмышын, аҙмышын һәм хатта ғүмерен халҡына бағышлаған шәхес тә ул. Ҡыҙғаныс ҡаршы, ундай кешеләр бөгөнгө көндә юҡ, сөнки беҙ бөтөнләй башҡа заманда йәшәйбеҙ һәм, бәлки, әле үҙ-үҙенде ҡорбан итеү заманы ла түгелдер. Ә Рәми Ғариповтың бөтә булмышы - үҙ-үҙенде, үҙенден шәхси мәнфәғәтендә ҡорбан итеү, хатта ки, ғаилә мәнфәғәтен ҡорбан итеү булған. Шиғырҙарын берәй ваҡыт уҡырҙармы, баҫтырып сығарырҙармы, юҡмы, был турала белмәгәндер ул, әммә Аллаһы Тәғәлә биргән талантын, һәләтен иле, халҡы мәнфәғәттәре өсөн файҙаланып ҡалырға ашыҡҡан.

**Ҡәҙим Аралбай, Башҡортостандың халыҡ шағиры:** Минең өсөн Рәми ағай - бөйөк остаз. Ундай шәхестәр бик һирәк. Рәми Ғарипов менән мин бер заманда йәшәп, бер осорҙа ижад итеп ҡалдым. Ул минең тәүге китабымды тикшереүҙә ҡатнашты. Беҙгә ул иң тәүҙә ил улы булырға өйрәтә торғайны, әммә был һүҙҙәрҙе лозунг итеп күтәреп йөрөмәне. Бик ҡатмарлы осорға тура килде уның ижад йылдары, шуға күрә ул заманы менән һыйышып йәшәй алманы. Бер ваҡытта ла заманға яраҡлашманы. Әгәр ҙә яраҡлашһа, Рәми - Рәми ҙә булмаҫ ине. Бик үҙенсәлекле шәхес... Бөгөнгө сараның, марафондың маҡсаты ла шунда: кешеләр күңелендә Рәми бармы, Рәми кем ул, минең Рәми кем? Бына ошо һорауҙарға яуапты һәр кем үҙендә табырға, Рәмиҙең хистәрен, Рәмиҙең ҡарашын, Рәмиҙең фекерен үҙ йөрәгендә тойорға тейеш.

**Нурия Ҡунысбаева, Ейәнсура районы Иҫәнғол гимназияһы тәрбиәсеһе:** "Эх, Өфөлә булһаң, шундай сараны күрһәң, ҡатнашһаң икән..." тип тәүҙә уфтаныштыҡ, ә унан Рәми рухы Ейәнсурала йәшәй бит, үҙебеҙҙә лә рух тантанаһы үткәрәйек әле, тип хәл иттек. Йома көн баҙар майҙаны һәр саҡ халыҡ менән тулы була. Шул майҙанды файҙаландыҡ. Ҡәҙимгә гөрләп торған баҙарҙа кеме һатып, кеме алып кинәнгән мәлдә, ҡапыл "Туған тел" шиғырын яңғыратҡан бер егет, уның артынса төрлө мөйөштән, төрлө тарафтан килеп ҡушылған егеттәр, ҡыҙҙар пәйҙә булыуы көтөлмәгән ваҡиға булды. Күҙ асып йомған арала халыҡ сығыш яһаусылар янына йыйылды. Ейәнсура башҡорт гимназияһының 11-се класс уҡыусылары, уҡытыусылары Рәми ағай шиғыры менән күптәрҙе һиҫкәндерҙе, албырғатты. Шунан инде дәртләнешеп китеп Иҫәнғолдоң Үҙәк майҙанына юл алдыҡ. Унда ла егет-ҡыҙҙарыбыҙ рухлы, дәртле итеп "Туған тел" шиғырын һөйләне. Флешмоб көтөлмәгәнсә шәп килеп сыҡты. Уның шаһиты булған тамашасылар фекерен әйтеп үтәйем. "Алҡымға төйөр тығылды ла тын да алып булмай. Шуны аңланым, беҙҙе берҙәм итер көс Рәмиҙең "Туған тел" шиғырында икән. Бер ниндәй өндәү ҙә, йырҙар йырлап, сәғәттәр буйы үҙебеҙҙең тарих биттәрен аҡтарыу ҙа кәрәкмәне. Ошо бер шиғыр беҙҙе бер бөтөн итеп күтәрә ала икәнен аңланыҡ." "Халҡыбыҙҙың алыштырғыһыҙ гимны "Урал" икәнен белә инек, ораны "Туған тел" шиғыры булаҫаҡ. Беҙҙе уятыр көс, рухландырыр ғәм ошо шиғырҙа икән", тинек.

Оло бер ағайҙың бер һүҙ әйтмәй, күҙ йәштәрен һөртөп, арҡамдан ҡағыуы ла, урта быуын йәшендәге бер ҡатындың "Это было что-то!" тип тел шартлатыуы ла, ейәнсәрәнә"Мин ул шиғырҙы һиңә ҡайтҡас тағы һөйләрмен", тип етәкләп, күҙҙәрендә осҡон баҙлап киткән инәй кеше лә ҡабат-ҡабат күҙ алдыма килә лә, аңлатып биргеһеҙ хис уята. Ғөмүмән, районыбыҙҙа тәүге тапҡыр үткәрелгән был флешмобта мин һүҙ көсөнә, шағир һүҙе, шағир ораны элек нисек халыҡты күтәргән, бөгөн дә үҙ көсөн юғалтмаған икәненә инандыҡ. Халҡым тип янып йәшәүҙең, иленә, теленә тоғро хеҙмәт итеүҙең юғары өлгөһө булған Рәми ағайҙың шиғырҙары һәр заман, һәр быуын өсөн юлдаш булып ҡалыуын тағы бер тапҡыр күрһәтте был сара.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

*Иң бөйөк һүҙ әйтелмәгән,*
*Иң бөйөк көн әле ул алда.*
*Килер ул көн, килер ул ҙур байрам,*
*Туй яһарбыҙ шаулап урамда.*
*Ул туйға мин, бәлки, барып етмәм,*
*Ярһыу атым янып йығылыр.*
*Тик минһеҙ ҙә тулы булыр ул туй,*
*Мин белмәгән дуҫтар йыйылыр.*
*Һөйләшһәләр әгәр туған телдә,*
*Телгә алыр улар мине лә.*
*Сөнки мин киләсәк менән бергә*
*Һаҡлап саптым, телем, һине лә.*

**XX быуат урталарында (1962 й.) яҙылған был күрәҙәлек шиғыры йыш ишетелде әлеге майҙанда. Уны тыңлағандар күңелендә үҙенсәлекле бер хис тоҡанды - әйтерһең дә шағир был шиғырын кисә генә яҙған. Үҙ заманында тыуып, шул ваҡытта йәшәһә лә, ысын шағир киләсәк өсөн ижад итә тигәндәре хаҡтыр, күрәһең. Эйе, уның шиғырҙары һуңламаны, улар бөгөнгөгә оран, ауаз булып, әлегесә, киң майҙандарҙа яңғырай. Ул көндө Сибай ҡалаһында, мәҫәлән, 3 мең ярым шиғриәт һөйөүсе майҙанға сыҡҡан. Әлбиттә, Өфөләге шиғри майҙанға килеүселәр һаны, Сибай менән сағыштырғанда, бер-нисә тапҡырға аҙыраҡ булды булыуға. Әҙиптәр ҙә бик аҙ күренде. Нисек кенә булмаһын, бындай шиғыр байрамдары даими үтергә тейеш, ә Киров район хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Баязитова әйтеүенсә, район етәкселәре был сараны майҙан менән дә, сәхнә менән дә һәр саҡ тәьмин итәсәк. Шәп тәкдим!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**



Сарала ҡатнашыусылар Рәми Ғариповтың улы Азамат (уртала) менән.

✓ *Аллаһы Тәғәләнең һеҙҙең халыҡҡа булған оло мөхәббәтенең бер дәлиле, иҫбаты бына ошо Нарыҫтауҙа ята. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) 630 йылда үҙенең иң яратҡан өс сәхәбәһен һеҙҙең халыҡҡа ебәргән.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# МӨХӘББӘТ ...

## дауаһы булмаған сирме?

■ Көндөҙ йоҡо килеүгә майлы ризыҡтар сәбәпсе булыуы бар, тип белдерә Пенсильвания университеты ғалимдары. Америка ғалимдары билдәләүенсә, шул уҡ ваҡытта углеводтарға бай аҙыҡ организмдың дөйөм тонусын күтәрә, кешене иғтибарлыраҡ итә, ә был сифаттар күп һөнәр эйәләренә бик кәрәкле. Ғалимдар үткәргән һынауҙарҙа 18 йәштән 65 йәшкә тиклемге һау-сәләмәт 30 кеше ҡатнашҡан. 5 тәүлек буйына улар лабораторияла йәшәгән һәм ғалимдар тәҡдим иткән ризыҡ менән туҡланған. Көндөҙ йоҡо килеү кимәле сомнология фәнендә киң ҡулланылған тестар ярҙамында билдәләнгән. Һөҙөмтәлә асыҡланыуынса, ашаған ризыҡтың аҡһымға бай булыуы көндөҙгө йоҡо килеүгә бер нисек тә тәьҫир итмәгән. Ә бына углевод һәм майҙан торған ризыҡ уның барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән, әммә углеводтар эшкә һәләтлелелекте лә арттырған. Был күренеш йәшенә, енесенә, төнгө йоҡоһоноң оҙайлығына, шулай уҡ ҡабул ителгән калорияларҙың иҫәбенә ҡарамай, экспериментта ҡатнашыусы һәр кемдә күҙәтелгән.

■ Иртән әфлисун һуты эсеү күпкә файҙалыраҡ, тип билдәләй Баффало университеты (АҠШ) ғалимдары. Улар 20-40 йәштәге кешеләр араһында тикшеренеүҙәр үткәреп ҡараған. Көн һайын һынауҙарҙа ҡатнашыусылар картуф, омлет һәм ветчиналы сэндвич ашаған. Әммә беренсе төркөм татлы һыу, икенсеһе ябай һыу, ә өсөнсөһө яңы һығылған әфлисун һуты эскән. Анализдар күрһәтеүенсә, әфлисун һуты үҙен иң файҙалы эсемлек итеп танытҡан: "әфлисунлы" төркөмдәгеләрҙең ҡанында глюкоза иң аҙы, ә иммун системаһы өсөн яуап биргән матдәләр күберәк булып сыҡҡан. Шулай уҡ иртәнге аш ваҡытында иң яҡшы эсемлектәр булып йәшел сәй һәм ябай һалҡын һыу иҫәпләнә.

■ Рәсәйҙә медицина хеҙмәткәрҙәренең 62 проценты тиерлек тәмәке тарта, ә сит илдә был һан 2-3 проценттан артмай. Был турала Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығы белдерә. 1 июндән илдә тәмәке тартыусылар һанын кәметеүгә йүнәлтелгән закон проекты ғәмәлгә инә, мәғлүмәттәргә ярашлы, бөгөн рәсәйлеләрҙең 40 проценты был яман ғәҙәт менән дуҫ. Шуға ла министрлыҡ етәкселеге тәмәке тартыуҙы ташлауҙы табиптарҙың үҙҙәренән башларға саҡыра. Пациенттарҙың амбулатор карталарын анализлау шуны ла күрһәткән, 10 процент осраҡта ғына табиптар ауырыуҙың тәмәке тартамы, юҡмы икәнлеген һорауҙы кәрәк тип таба.

■ Мөхәббәт - ул сир. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы ошондай ҡарар сығарып, уны F 63.9 шифры менән ауырыуҙар реестрына индергән. Мөхәббәт хәҙер "Ғәҙәт һәм һәүәҫлек боҙолоуы" бүлегендә алкоголизм, уйын ҡомары, токсикомания, клептоманиянан һуң тора. Һәр ауырыуҙың үҙенең билдәләре булған кеүек, мөхәббәттең дә билдәләре бар: баштан бер үк уйҙар сыҡмай, кәйефең үҙгәреп тора, йоҡо насарая, ҡан баҫымы йә күтәрелә, йә төшә. Әлегә был сирҙе дауалау ысулы билдәләнмәгән, дарыу уйлап сығарыу кәрәклеге түбәндәге сәбәптәр арҡаһында кисектерелеп торған: беренсенән, был сир ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үҙенән-үҙе үтә, ғашиҡ булыу фазаһы 3 айҙан 9 айға тиклем дауам итә, ә 3 йылдан һуң мөхәббәттән эҙ ҙә ҡалмай. Икенсенән, был сирҙән дауаланырға бер кем дә ашыҡмай, киреһенсә, табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр уны оҙайтырға теләй.

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

**Ошо көндәрҙә Башҡортостаныбыҙ мосолмандары өсөн ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булған ваҡиғалар булып үтте. Беренсеһе: бөйөк башҡорт дин әһеле, мәғрифәтсе шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 180 йыл тулыу айҡанлы Өфөлә "Рәсәйҙең мосолман донъяһы: традициялар һәм яңылыҡтар" халыҡ-ара симпозиумы ойошторолдо. Был сара артабан шәйехтең тыуған ере Учалы районында һәм ул нигеҙ һалған "Рәсүлиә" мәҙрәсәһе урынлашҡан Троицк ҡалаһында үтте. Ишан тураһында "Киске Өфө" гәзите биттәрендә байтаҡ хеҙмәттәр баҫылды, шуға ла уның эшмәкәрлеге менән гәзит уҡыусылар арыу уҡ таныштыр. Дөйөмләштереү рәүешендә Рәсәй мосолмандарының Баш мөфтөйө Тәлғәт Тажетдиндың симпозиумдағы сығышынан шундай һүҙҙәрҙе генә килтереп үтәбеҙ: "Зәйнулла Рәсүлев бөтөн донъя мосолмандарының рухи атаһы. Ул суфыйсылыҡты эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыусы. Суфыйҙар һүҙҙә лә, эштә лә эскерһеҙ булыуы менән айырылып тора. Зәйнулла ишан да халыҡты ошондай эскерһеҙлеккә әйҙәгән. Әммә элек тә, бөгөн дә суфыйсылыҡҡа шикләнеп ҡараусылар бар. Беҙ, Зәйнулла ишандың хаҡ юлына инаныусылар, уның мираҫын һаҡларға һәм киләсәк быуынға еткерергә бурыслыбыҙ. Уның рухи мираҫын етерлек өйрәнһәк, беҙгә бер ниндәй дини экстремизм да, ваһһабизм да ҡурҡыныс түгел..."**

# "МИН ҺЕҘҘЕ ЯРАТАМ,

## һеҙҙең йөрәгегеҙ асыҡ..."



Тағы ла бер үтә мөһим ваҡиға шул булыр: Башҡортостаныбыҙға Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең алтын сылбырын (силсиләһен), тимәк, шәйехебеҙ Зәйнулла Рәсүлевтың хаҡ юлын, тәғлимәтен дауам итеүселәрҙең, уны үҙенең остазы тип иҫәпләүселәрҙең береһе, Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең 40-сы быуын вариҫы, Кипрҙа йәшәүсе Солтан-әүлиә Мәүләнә Мөхәммәт Нәзим әл Хаҡҡаниҙың улы Солтан Мәхмәт шәйех килде. Шәйех Мөхәммәт Нәзим әл Хаҡҡани күптән түгел өлкән улы Солтан Мәхмәтте үҙенең вазифауи вариҫы тип иғлан иткәйне, шуға ла изге тыуған еребеҙгә ошондай кешенең килеүе Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән ҙур бүләк булып ҡабул ителергә хаҡлы.

Алдан төҙөлгән программаға ярашлы, Башҡортостаныбыҙҙың ниндәй генә урынына аяҡ баҫмаһын, оло әүлиәне яҡындан күреп, уның фатихаһын алып ҡалыу ниәте менән һәр төбәктә меңдәрсә халыҡ йыйылды. Оло ҡунаҡты күреп ҡалырға теләүселәр араһында хатта сит өлкәләрҙән, күрше Татарстан Республикаһынан, Ҡаҙағстандан, Үзбәкстандан, Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан һәм хатта алыҫ Йәмәндән килгән мосолмандар ҙа бар ине.

Шәйех Мәхмәт иң тәүҙә әсәһе, һөйөклө милләттәшебеҙ, мәрхүмә хажиә Әминә (урыны ожмах түрендә булһын!) инәйҙең тыуған ере - Татарстандың Мөслим районында урынлашҡан Байыҡ ауылына сәфәр ҡылды. Башҡортостандың Үҙәк тарих архивы материалдары буйынса, Өфө губернаһының Бәләбәй өйәҙенә ҡараған Байыҡ ауылында 1870 йылғы мәғлүмәттәр буйынса тик башҡорттар ғына йәшәгән. Әле лә халыҡ үҙенең башҡорт тамырҙары тураһында яҡшы хәбәрҙар, күптәрҙең йорттарында шәжәрәләре һаҡлана. Әминә инәйҙең репрессия йылдарында сит илгә китергә мәжбүр булған өләсәйолатаһы ла үҙҙәренең башҡорт тамырҙары тураһында балаларына әйтеп ҡалдыра. Был хаҡта Солтан Мәхмәт шәйех һәр осрашыу мәлендә иҫкә алып үтте. Ә Башҡортостан ерендә ундай осрашыуҙар байтаҡ булды.

Бәләбәй ҡалаһынан 150 км алыҫлыҡта ятҡан ошо Байыҡ ауылынан һуң Солтан Мәхмәт шәйех үҙ сәфәрен Миәкә районында дауам итте. Нарыҫтауҙа урынлашҡан Зәйет улы Зөбәйер һәм Зөбәйер улы Ғабдрахман сәхәбәләрҙең мәҡәменә зыярат ҡылып, ил-йортобоҙға изге доғаларын бағышланы.

- Бөтәгеҙҙе лә тәүҙә "Әссәләмәғәләйкүм!" тип Аллаһының сәләмдәре менән сәләмләйем һәм һеҙгә Шәйех хәҙрәттәренең сәләмдәрен еткерәм! - тип, бында йыйылған 3 меңдән ашыу мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә ихлас сәләмдәрен күндерҙе Солтан Мәхмәт шәйех. - Атайым һеҙҙең тарафтарҙан кешеләр килһә, гел генә "Мин һеҙҙең кейәүегеҙ", тип ихлас ҡыуана. Ысынлап та, ул һеҙҙе ысын күңелдән ярата. Уның да, әлбиттә, бер хикмәте бар. Ул хикмәт нимәлә? Әгәр ҙә берәй кешене Аллаһы Тәғәлә тоғро юлға ебәрә икән, ул Аллаһы Тәғәләнең ошо кешегә булған иң ҙур бүләге. Белеүегеҙсә, бер аятында Аллаһы Тәғәлә үҙенең яратҡан Бәйғәмбәренә (с.ғ.с.) шулай ти: "Һин үҙең теләгәнде тоғро юлға йүнәлтә алмайһың, тик мин теләһәм генә ул тоғро юлға баҫа!". **Ни өсөн беҙҙең шәйех хәҙрәттәре һеҙҙең халыҡты бик ныҡ ярата? Сөнки Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе бик ныҡ һөйә. Аллаһы Тәғәләнең һеҙҙең халыҡҡа булған оло мөхәббәтенең бер дәлиле, иҫбаты бына ошо Нарыҫтауҙа ята. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) 630 йылда үҙенең иң яратҡан өс сәхәбәһен һеҙҙең халыҡҡа ебәргән, ошо ислам нуры менән һеҙҙе лә нурландырған һәм бөтөн төрки халыҡтары араһында беренсе булып исламды башҡорттар үҙ ирке менән ихлас ҡабул иткән. Был Аллаһы Тәғәләнең мөхәббәте, һөйөүе һеҙҙең менән бергә булғанын аңлата. Шәйех әфәнде лә һеҙҙе шуға ярата.**

*✓ Ҡудси-хәҙистә Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Мин яратҡан ҡоломдоң ҡарар күҙе, ишетер ҡолағы, һуғыр ҡулы һәм атлар аяғы булырмын". Тимәк, Аллаһы Тәғәлә үҙенең яратҡан ҡоло аша Башҡортостан еренә иғтибарын йүнәлтте.*



Мин һеҙҙең халҡығыҙҙың тарихын да бер аҙ беләм. Төрлө золомдарға, хаҡһыҙлыҡтарға ҡаршы баш күтәреп, һеҙҙең халҡығыҙ бик күп шәһит булған. Шул шәһитлектәрҙән һуң, бәлки, халҡығыҙҙың үндан бер өлөшө генә тороп ҡалғандыр. Халҡығыҙҙың үҙ еренә бәйлелеге ныҡ көслө булған. Аллаһтың ризалығы өсөн улар үҙҙәрен аямаған, йәндәрен Аллаһҡа тапшырған.

Сәхәбә хәҙрәттәре лә һуғышҡа инер саҡта гел Бәйғәмбәребеҙгә (с.ғ.с.), шәһит булайыҡ, тип мөрәжәғәт иткән һәм доға һораған. Тарихыбыҙға ҡараһағыҙ, үҙҙәрен Аллаһҡа бағышлаған Солтандар бер ҡасан да Аллаһы Тәғәлә юлынан, уҡытыусылары юлынан тайпылмаған. Тәриҡәт - әҙәп (тәрбиә) тигәнде аңлата. Күп кеше тәриҡәт һүҙен аңлап бөтөңкөрәмәй. Тәриҡәт - исламдың үҙе. Унан ҡурҡырға ярамай. Әһлесөннәт үә лә йәмәғәт - тәриҡәттең үҙе ул. Әһлесөннәттең эсендә кем бар? Әһлесөннәт - күпселектә булған хаҡ мосолмандар. Бына бында ла бөгөн күп халыҡ йыйылған. Кем әҙселектә, улар хаҡ мосолман түгел. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әҙселектә булғандар ҙа бар. Иншаллаһ, улар ҙа төҙәлер. Аллаһы Тәғәлә уларҙы тоғро юлға күндерһен тигән доғала ҡалабыҙ. Ундай төркөмдәр бер бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән, улар Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) заманында ла булған. Уларҙың барлыҡҡа килгәндән алып кешелеккә лә, исламға ла бер хеҙмәттәре лә булмаған. "Ундайҙар көндәр буйы намаҙ уҡыһа ла, ураҙа тотһа ла, атылған уҡ кеүек, диндән алыҫ ҡалырҙар", - тигән Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.). Тарихҡа күҙ һалһаң, ундайҙар гел фетнә ҡуптарғандар, иң һәйбәт мосолмандарҙы, Сәхәбәләрҙе, хәлифәләрҙе үлтергәндәр. Хәҙрәти Ғүмәр, Хәҙрәти Ғосман, Хәҙрәти Ғәли улар ҡулынан һәләк булып ҡалған.

Әлбиттә, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ аҡыллы кеше булған, беҙҙән күпкә аҡыллыраҡ. Шуға ла ошо динебеҙ үҙен 1400 йыл буйы һаҡлап килә. Унда берәй яңылыш һүҙ булһа, ул күптән бөткән булыр ине. Ошо динде ата-бабаларыбыҙ беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған. Уны ата-бабаларыбыҙ үҙ-үҙҙәрен йәлләмәйенсә, ғүмерҙәрен аямайынса һаҡлап алып ҡалған. Беҙ уға хыянат итергә тейеш түгел. Шуға күрә бөгөн һеҙҙең өҫтөгөҙгә оло бурыс, оло вазифа төшөрөлә. Ошо хаҡ ислам динендә матур итеп йәшәп, уны үҙегеҙҙең ейәндәрегеҙгә лә еткерергә кәрәк. Мин башта уҡ әйтеп үткәйнем: һеҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан һәйләгән халыҡ. Был тормош - имтихан. Ошо һынауҙы матур итеп үтһәгеҙ, хатта ата-бабаларығыҙ етә алған рухи кимәлдән дә юғарыраҡ кимәлгә күтәреләһегеҙ. Бында һеҙ бөгөн Аллаһы Тәғәләнең ризалығын өмөт итеп, матур ниәттәр менән килдегеҙ. Ошо изге эрҙә теләгән ихлас ниәттәрегеҙ ҡабул булһын, иншаллаһ!

Минең ата-бабаларым, олатайым менән өләсәйем 80 йыл элек, теге быуаттың 30-сы йылдарында был яҡтарҙан күсенеп киткәндәр. Туғандарымдың күбеһе ошо ерҙәрҙе ҡайтып күрә алмай, гүр әйәһе булды. Әсәйем яҡлап ике ағайым ғына иҫән бөгөн. Әлхәмдүлиллаһ, миңә изге Рәжәб айында ата-бабаларым төйәгенә ҡайтып, һеҙҙең менән бергә доғала тороу насип булды..."

Оло әүлиәнең һүҙен ҡеүәтләгәндәй, Нарыҫтау буйындағы "Сәхәбәләр" мәсете тәңгәлендә ҡояшты уратып түңәрәк йәйғор ҡалҡты. Әллә нисә тиҫтә йыл эсендә бер генә була торған был тәбиғәт күренеше ниндәйҙер оло билдә булараҡ ҡабул ителде. Етмәһә, ошо мөғжизәне күреп мөкиббән киткән халыҡты тағы ла ныҒыраҡ ғәжәпләндереп, аҡ болоттар яҙҙамында күктә "Аллаһ" һүҙе хасил булды. Ошо күренештәр ҙә, мәсет майҙанында шәйех менән бергәләп уҡылған зекер ҙә, ҡылынған намаҙ ҙа, шулар һуңында шәйех тарафынан бирелгән бәйғәт һәм фатиха ла - барыһы ла оло ҡәнәғәтләнеү йөгондорҙо күңелдәргә. Ошо төп майҙан эргәһендә Роберт Юлдашев етәкселегендәге "Ҡурайсы" һәм "Арғымаҡ" этно-рок төркөмдәре егеттәренең ҡурай моңдары яңғыратыуы, мөнәжәттәр әйтеүе, бәлки, кемдәрҙәр ғәжәп тойолғандыр. Әммә быныһы ла беҙҙең хаҡ дин юлындағы атай-олатайҙар, шул уҡ Зәйнулла ишан һәм уның мөриттәре йолаһы - улар йыйылған майҙанда һәм йыйындарҙа ла һәр саҡ ҡурай моно, мөнәжәттәр яңғыраған...

Артабан Солтан Мәхмәт шәйех сәхәбәләр төйәген Нарыҫтауҙа төҙөләсәк мәҙрәсәгә доға уҡып, нигеҙ ташы һалды, шулай уҡ артабанғы сәфәр барышында Мәләүез районы Ташлыкүл ауылында төҙөләсәк мәсеткә лә нигеҙ ташы һалынды. Әбйәлил районы Асҡар, Белорет районының Ассы ауылындағы мәсет һәм Белорет ҡалаһында яңы төҙөлгән мәсет биналары ла оло ҡунаҡтың иғтибарынан ситтә ҡалманы.

Күгәрсен районындағы Төпсән ауылындағы Әүлиә тауына күтәрелгәс: "Әүлиәләрегеҙҙең рухтары һеҙҙең халҡығыҙҙың ерҙәрен ҡурсалай. Диннеҙлек хөкөм һөргән йылдарҙа ла улар ярҙамында һеҙҙең иманығыҙ, ихласлығығыҙ һаҡланып ҡалған. Әүлиәләрегеҙҙе яратығыҙ, изге урындарығыҙҙы һаҡлағыҙ!" - тип олуғ дин әһеле халҡыбыҙҙы иманға саҡырҙы. Сәфәр барышында ул шулай уҡ Торатау әүлиәләре, Хөсәйенбәк әүлиә, Йәгәфәр, Мораҙым ишандар, Бәндәбикә, Ғәзизйән, Әхмәтшәриф, Гәүһәриә әүлиәләр, Шәмиғол хәлфә, Аҡмулла сәсәндәр рухына доғаларын бағышланы. Ошо рәүешле Солтан Мәхмәт шәйех әүлиәләр ҡәберҙәренә ниндәй мөнәсәбәттә булырға тейешлек өлгөһөн күрһәтте. "Әүлиәләр ҡәберҙәренә беҙ уларға табыныр өсөн түгел, ә зыярат ҡылыр өсөн, Аллаһы ризалығы өсөн йөрөйбөҙ, - тине ул. - Зыярат ҡылыу - әүлиәләргә, уларҙың вариҫтарына, нәҫеленә хөрмәт күрһәтеү. Был әүлиәләр - олуғ заттар. Ә олуғ заттар ҡәбере эргәһендә ҡылынған доғаларҙы Аллаһы Тәғәлә енелерәк ҡабул итә... "

Солтан Мәхмәт шәйех Баймаҡ районында халҡыбыҙҙың киң ҡөҙрәтле әүлиәләре Мөжәүир хәҙрәт, Ғабдулла Сәйеди ишандарҙың, Силәбе өлкәһе Троицк ҡалаһында Ҡотоп Заман Зәйнулла Рәсүлевтың ҡәберенә зыярат ҡылды, мәсетендә намаҙ уҡыны. Сит ил ҡунаҡтары шулай уҡ мәшһүр ишандың тыуған ауылы Шәриптә Зәйнулла ишандың ғүмер юлын сағылдырған тамашаны бик яратып ҡараны. Учалы районында изге Әүеш шишмәһе һыуын тәмләп, Мөхәммәт Ризуан Әл-Әүешиҙең мәҡәмәнә зыярат ҡылды. Нарыҫтауҙағы йыйындан һуң шәйехте йәнә бер күрергә тип, Өфөнән 350 саҡрымлыҡ юлды такси яллап килеп еткән Йылайыр районы Ҡәҙерша ауылынан туҡһан йәште ҡыуған аҡһаҡал Нуретдин олатай Игебаев менән етәкләшеп күтәрелде Әүеш тауына оло ҡунағыбыҙ. "Нуретдин ағай килгәс, Мәүләнә үҙе янына килгәндәй булды!"- тине шәйех һуңынан. Нуретдин олатайыбыҙ буш ҡул менән килмәгәйне. Ул ҡунаҡҡа ағастан юнып эшләнгән ат һыны бүләк итте: "Беҙҙең халыҡта "Ир ҡанаты - ат булыр" тигән мәҡәл бар. Ата-бабаларыбыҙ ҡанатлы толпарҙарында хатта Парижға барып еткән. Ошо ат Һеҙҙе ҡанатлы итһен! Ат кеүек ҡарыулы, ат кеүек түҙемле, ат кеүек салт булығыҙ!" Ихлас олатайыбыҙ башҡаларға өлгө күрһәтеп, бер йыл буйы йыйған пенсияһын әүлиәләребеҙ рухына хәйер итеп өләшеп сыҡты.

**- Мин әсәйем яҡлап олатайымдың ни өсөн шундай ихлас, йомарт булғанын Башҡортостанға килгәс кенә аңланым, - тине ошо күренештән һуң Солтан Мәхмәт шәйех.- Беҙҙең башҡорт халҡының ҡанында икән ул ихласлыҡ һәм йомартлыҡ! Бында мин үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр әйтеп аңлата алмаҫлыҡ күңел рәхәтлеге кисерҙем. Беҙҙең халыҡ - бик ихлас халыҡ. Мин һеҙҙе яратам, һеҙҙең йөрәгегеҙ асыҡ! Мин бында тағы ла мотлаҡ киләсәкмен! Башҡортостан - ысынлап та әүлиәләр иле. Килеп күрәһе ерҙәрем күп әле...**

Сәфәр көндәрендә Башҡортостаныбыҙҙың төрлө мөйөштәрендә йыйындар үткәрелеп, әүлиәләребеҙ рухына бихисап ҡорбан малы салынды. Сәхрәләрҙә, мәсеттәрҙә йәмәғәт менән уҡылған намаҙ, күмәкләп әйтелгән зекер ҡәлептәребеҙҙе яҡтыртты. Ошолар бәрәкәтендә тотош ил-йортобоҙ нурланды. Оло әүлиәне яҡындан күреп, уның фатихаһын алып ҡалыуыбыҙ көс-дәрт өҫтәне, имандарыбыҙҙы нығытты. Ошо йыйындарға меңдәрсә халыҡ йыйылды. "Ил башлыҡтары килгәндә лә был хәтле кеше йыйылмай торғайны!" тип аптырағандар ҙа булды. Өфө, Илеш, Миәкә, Ишембай, Мәләүез, Күгәрсен, Баймаҡ, Әбйәлил, Троицк, Учалы, Белореттарҙың ҡунаҡсыллығы, мул ҡуллылығы, ихласлығы арбаны. Ошо йыйындарҙы ойоштороған, матди ярҙам күрһәткән, килгән ҡунаҡты оҙата йөрөгән, аш-һыу яраштырған, саҙаҡа өләшкән барса мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә, Мәүләнә Солтан-әүлиә Шәйех Мөхәммәт Нәзим әл Хаҡҡани әр-Раббаниҙың Башҡортостандағы күп һанлы мөриттәренә Хоҙай Тәғәләнең рәхмәттәре яуһын! Йыйынға тупланып килгән һәр ҡәрҙәшебеҙ хәйерле ниғмәттәргә ирешһен!

Шатлығыбыҙ оло беҙҙең, сөнки, ҡунағыбыҙ әйтмешләй, Мәүләнә Солтан-әүлиә Шәйех Мөхәммәт Нәзим әл Хаҡҡани әр-Раббани үҙенең хаҡ ҡарашын беҙҙең башҡорт халҡына, башҡорт еренә йүнәлтте. Солтан әүлиәнең хаҡ ҡарашы нимә ул? Билдәле Ҡудси-хәҙистә Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Мин яратҡан ҡоломдоң ҡарар күҙе, ишетер ҡолағы, һуғыр ҡулы һәм атлар аяғы булырмын". Тимәк, Әлхәмдүлилләһ, Аллаһы Тәғәлә үҙенең яратҡан ҡоло аша Башҡортостан еренә иғтибарын йүнәлтте. Килгән ҡунағыбыҙҙың доғалары аша илебеҙгә Аллаһы Тәғәләнең бөйөк фатихалары, ҙур рәхмәттәре яуһын! Илебеҙ, еребеҙ, телебеҙ, динебеҙ, ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙ, рухи сығанаҡтарыбыҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡурсаулы булһын! Халҡыбыҙ киләсәкле булһын! Берҙәм булайыҡ! Хаҡ иманлы, ғилемле, рухлы, ҡеүәтле булайыҡ!

**Зөләйха ХАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

148. Тормош юлдашығыҙға ышанығыҙ. Был һеҙҙең мөнәсәбәттәрҙе нығытыр һәм бер үк тиҙлек менән бер йүнәлештә үҫеү мөмкинлеген бирер. Был шулай уҡ тонусығыҙҙы яҡшы күтәрер һәм проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеп, һеҙгә иң яҡын булған кешегеҙгә ҡағылған мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеү мөмкинлеген бирер.

149. Һәр көн алға ышаныслыраҡ барығыҙ. Тормош майҙанында уйнаған енеүселәр көн һайын үҙ ҡеүәттәренең һәм мөмкинлектәренең сиген киңәйтә бара. Нимәнән ҡурҡһағыҙ - шуны эшләгеҙ, ахырҙа ҡурҡыу бөтәсәк. Еңеүселәр, был күнелдәренә ятмаһа ла, бик ныҡ үҫешкә ынтылмаған кешеләр эшләргә теләмәгән эштәр менән шөғөлләнә. Әммә был уҡ уларҙың характерын сыныҡтыра, ихтыярын һәм батырлығын нығыта. Үҙегеҙҙең көсһөҙ яғығыҙ менән шөғөлләнегеҙ. Һәр ваҡыт аҙаҡҡа ҡалдырған эшегеҙгә тотоноғоҙ. Яҙырға ваҡытығыҙ етмәгән Рәхмәт хатын яҙығыҙ. Үҙтәрбиәнең мускулдарын көсәргәндерегеҙ һәм күнектерегеҙ. Улар һәр көнөгөҙҙө ҙур ҡәнәғәтлек менән тултырған, юғалтҡан энергияғыҙҙың һәр калорияһын тағы ла һөҙөмтәлерәк итер энергия булып ҡайтыр.

150. Ҙур уңыш ҡаҙаныусыларҙың барыһы ла даими рәүештә үҙҙәрендә оптимизм кеүек мөһим ғәҙәтте үҫтерә. Оптимизмһыҙ тормош үҙенең сағылышын юғалта һәм аҙым һайын ауырлыҡтар һағалай башлай.

151. Бөгөн үк үҙегеҙҙең ҡарашҡа кешеләрҙәге иң матур сифаттарҙы яҙығыҙ һәм уны карауатығыҙ эргәһенә элеп ҡуйығыҙ. Һәр иртән йоҡонан торғанда иғтибарығыҙҙы көн дауамында үҙегеҙҙә күрергә теләгән сифатҡа йүнәлтегеҙ. Бер аҙнанан һуң үҙгәреш һиҙерһегеҙ. Бер айҙан һуң инде был сифаттар ныҡлап нығыныр һәм артабан үҫешер. Ике айҙан һуң улар тамам һеҙҙеке булыр.

152. Был донъяла күпме танышығыҙ бар - абруйығыҙ ҙа шул тиклем. Сөнки һеҙҙе белгән һәр кем һеҙҙең турала бары тик үҙенсә генә уйлай. Әммә һеҙҙе уйланырға мәжбүр итеүсе бер нәмә бар - ул характерығыҙ. Уның өҫтөнән тулы контроль булдырыу мөмкинлегегеҙ бар, һәм һеҙ тап шуны үҫтерергә, камиллаштырырға һәм тәрбиәләргә тейешһегеҙ. Характерығыҙ ныҡлы һәм энергиялы булғанда инде ҡалған башҡа нәмәләр мотлаҡ уның артынан эйәрәсәк.

153. Үҙегеҙҙе әфлисун тип иҫәпләгеҙ. Тышҡа бары тик эске яғығыҙҙа нимә бар, шул ғына ағып сығыуы мөмкин. Әгәр мейегеҙҙе тәрән, тыныс, ыңғай уйҙар менән тултырһағыҙ, һеҙҙең "һутығыҙҙы" һығырға теләүселәр бары тик шул сифаттарҙы ғына алыр.

154. Беҙҙең тормошобоҙҙо йәйләр эсенән урынлаштырылған ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығы тип күҙ алдына килтерергә мөмкин. Беҙ - Ғаләмдең ҙур сәхнәһендә бары тик тыҙан бөртөгө генә. Сөнки был донъяны ҡалдырып киткәндә, беҙ унан бер нәмә лә алып китә алмайбыҙ, шуға ла тормошобоҙҙоң төп асылы башҡаларға биреү һәм хеҙмәт итеү булырға тейеш. Һәр саҡ ошо хаҡта иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Шуға күрә һәр иртән: "Бөгөн мин үҙемдә тулыһынса башҡаларға арнайым, бөгөн мин башҡалар хаҡында хәстәрлек күрәсәкмен һәм һәр кемгә лә изгелекле буласаҡмын", - тип ҡабатлағыҙ. Был изгелек һеҙгә, әгәр бөтөн нәмәнән үҙегеҙгә файҙа ғына эҙләмәйенсә, ысын мәғәнәһендә башҡалар хаҡында хәстәрлек күрһәгеҙ, ҙур рухи дивидендтар килтерәсәк.

**Робин ШАРМА.**



## 27 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.10 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Бывшая жена". Сериал (12+)
23.30 "Вечерний Ургант" (+16)
00.00 "Познер" (16+)
01.00 Ночные новости
01.25, 03.05 "Конец света". Приключения (18+)
